ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

30-6 апрель - май (алағарай - һабанай)

2016

№ 18 (696)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бындай алыштар...**

ир-егеттәрҙе сынығтыра



6

**Ил ағаһы булыу өсөн...**

һаҡал кәрәкмәй, аҡыл кәрәк



8-9

**Баш ите - башҡа дауа**



13

**Ҡайһы ауыл...**

ошондай ансамбле менән маҡтана ала?



15

**ТВ-программа** 14

*Ике төрлө хәл-торош кешеләрҙең ҡулын һәлендереп, эшһеҙлеккә килтерә: беренсеһе - булғаны менән ҡәнәғәтләнеүҙән килгән күңел тыныслығы; икенсеһе - теләгеңде ҡандырып, тормошҡа ашырып бөтөү мөмкин булмаған эш икәненә инаныу. Теләктәре булмаған, теләктәре булып та уны ғәмәлгә ашырыуҙан төңөлгәндәр ойой, битарафҡа, йүнһеҙгә әйләнә. Был хәлдән бары тик туҡтауһыҙ эшләп, хеҙмәт менән булып ҡына сығыу мөмкин. Эшләгеҙ!*

*Ж. -Ж. РУССО.*

1 Май

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә, ауылығыҙҙа, кала һәм райондарҙа хеҙмәт энтузиазмы тойоламы?

***Фәриҙә СИТДИКОВА, хеҙмәт ветераны, Учалы районы Ураҙ ауылы:*** Хеҙмәт энтузиазмы тигән нәмә ауылда инде ул! Эшһеҙ бер көн дә тороп булмай беҙҙә. Әле бар халыҡ гөр килеп йорт яны баҡсаларында эш башланы. Унан алда ғына күмәкләшеп өмә үткәреп, ауыл биләмәһен, шулай уҡ һәр ғаилә үҙ йорт-ҡураһы эргәләрен таҙарттыҡ. Йәмле, күңелгә еңел, рәхәт булып ҡалды. Энтузиазм, тигәндәй, беҙҙең быуын бит шулай элек-электән совет тәртиптәренә күнеп, эш менән йәшнәп йәшәне. Колхоз йәштәре айырыуса дәртле булды: йырлап эшкә барҙылар, йырлап эштән ҡайттылар. Бесән ваҡыттары үҙе бер ҙур өмәгә әйләнеп, уйын-көлкөлө байрам рәүешен алыр ине. Хәҙер колхоз да юҡ, эш тә юҡ, тигәндәй. Улай тиһәң дә, бая әйткәнемсә, ауылда эш булмай тормай. Ҙур, күмәк хужалыҡ берләштереп тормаһа ла кешене, һәр кем шәхси хужалығында бөтөрөләп эшләй. Әле бына сәсеү эштәре башланырға тора. Бының өсөн баҡса ерен таҙартып, орлоҡто әҙерләп ҡуябыҙ. Беҙҙең ултырған ер уйһыуыраҡ булғанлыҡтан, ер бик дымлы әле, шуға ер ҡаҙыу эштәрен кисектерергә тура килә... берәк торабыҙ. Ә бына тау битләүе яғындараҡ йәшәгән ауылдаштар, тупраҡ һурыҡҡас, күптән ерҙәрен эшкәртеп, сәсәһен сәсеп уҡ ҡуйҙылар хатта. Ярай, Хоҙайҙың көнө етерлек, беҙ ҙә өлгөрөрбөҙ, тимен, Алла бирһә.

Беҙҙең Ураҙ ауылы ҙур, етмәһә, асфальт юл аръяғында йәштәр йорт һалып инәләр, тотош тип әйтерлек яңы бер ауылға нигеҙ һалынып ята. Ауылыбыҙҙа 11 йыллыҡ мәктәп, музыка мәктәбе, ситтән килеп уҡыусылар өсөн интернат, балалар баҡсаһы, амбулатория, ауыл хакимиәте, мәсет бар. Мәктәбебеҙҙә пионер ойошмаһы ла бөтмәгән, балаларҙы тәрбиәләүҙә бына тигән бер сара. Балалар хеҙмәткә ылыҡтырыла, мәктәп территорияһын таҙартып, ҡарап ҡына торалар. Тимур командаһы ла өлкән йәштәгеләрҙе шефҡа алып, хужалыҡ эштәрендә ярҙам итә. Ауыл халҡы күпләп мал көтә. Бөтә был эштәр, әлбиттә, халыҡтың энтузиазмына нигеҙләнгән дә инде.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЯҠШЫ ХӘБӘР!

## БИК БОРОНҒО...



Австрияла Шүлгәнташ мәмерйәһендәге рәсемдәрҙең датаһын билдәләү буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре тамамланды. Һөҙөмтәләрҙән күренеүенсә, һүрәттәр бик боронғо. Тикшеренеүҙәр рәсемдәрҙең 36400 йыл элек төшөрөлөүен күрһәтте. Уларҙың минималь йәше 14500 йыл элек билдәләнгән. Шулай итеп, мәмерйәнең аҫҡы ҡатындағы һүрәттәр 21900 йыл элек эшләнгән.

Тикшеренеүҙәрҙе Юрий Дублянский етәкселегендә уран-торий алымы менән Инсбрук университетының Геология институты белгестәре үткәргән. Сараны ойоштороуҙа һәм эштәрҙе башҡарыуҙа А.П. Карпинский исемендәге Бөтә Рәсәй ғилми-тикшеренеү геология институтының төп ғилми хеҙмәткәре Юрий Ляхницкий әүҙем ҡатнашҡан. "Шүлгәнташ мәмерйәһендәге рәсемдәрҙе өйрәнеү өсөн өлгөләр тау тоҡомон быраулап тишеү юлы менән алынды. Тергеҙеү эштәре реставратор Эудаль Гийаменың тәҡдименә ярашлы башҡарылды", - тип һөйләне Күсемһеҙ мәҙәни мираҫты һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-етештереү үҙәге етәксеһе Данир Ғәйнуллин.

Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙең хронологияһын өйрәнеү маҡсатында ойошторолған ғилми-тикшеренеү эштәренә Башҡортостан Башлығының гранты бүленгән.

ТУКТА, МӘЛ!

## ХӘЙЕРЛЕ СӘҒӘТТӘ, СӘСЕҮСЕ!

**Яҙ өсөн тиҙлек һәм хәрәкәт төҫ. Шуға ла сәскә атҡан баҡса, болон эргәһендә хозурланып, оҙаҡ баҫып торма, тоғондағы орлоғондоң сәселмәй ҡалыуы ихтимал. Һинең ашығыуың йә ашыҡмауың, сәсергә теләүең йә теләмәүең - яҙ өсөн барыбер. Ул һиңә бер ниндәй ҙә кәңәш бирмәҫ йә хаталарҙан араламаҫ. Шуның өсөн тормошонда яҙ йылмайған мәлдә эшләү мөмкинлеген һайла. Нисек кенә булмаһын, кешенең һәр тырышлығы бүләкләнәсәк. Һәр сәселгән орлоҡ - бер тоҡ иген, һәр идея - күп идея, һәр күрһәтелгән ышаныс - күптәрҙең ышанысын, һәр түҙемлек һәм аңлау - шулай уҡ аңлау булып үҙеңә ҡайтасаҡ. Бына яҙҙың фиғеле: нисек сәскәнһең, шулай урып алырһың. Алдаҡ сәсәһең икән - алдаҡ йыяһың. Һаранлыҡ сәсһәң - фәҡирлек йыяһың, ялҡаулыҡ сәсһәң, әлбиттә, келәтең буш буласаҡ. Һинең аңыңа эләккән икеләнеү, ҡурҡыу һәм ышанмаусылыҡ орлоғо шуны уҡ шыттырып бирәсәк. Аҡыллы, аңлы, егәрле сәсеүсе бул!**



12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫРЛЫҠҠА БИРЕШМӘЙСӘ...

***Азамат ХУЖАХМӘТОВ, "Башҡортостан" киностудияһы директоры:*** Элек-электән һәр замандың үҙ көйө, үҙ проблемалары булған. Һәр дәүер үҙе менән ниндәйҙер яңы һулыш, йүнәлеш алып килгән. Яңы шарттарға яраҡлашып йәшәп китеүе еңел түгел. Бөгөн дә көрсөк ваҡытында һәр кемебеҙ стресс кисерә. Ләкин беҙгә тормош көтөүе ауыр, тип, өмөтһеҙлеккә бирелергә ярамай. Сөнки был ваҡытлыса ҡыйынлыҡтар ҡасан да булһа үтер, барыһы ла йәйләныр, үҙ урынына ҡайтыр. Тик шул көндө яҡынайтыу өсөн һәр кем ҡулынан килгәнсә тырышырға тейеш. Юрғаныңа ҡарап, аяғыңды һуҙ, тигәндәй, булған мөмкинлектәрҙе файҙаланып эшләргә кәрәк.

Ҡайһы бер кешеләр ниндәй ҙә булһа эште башлар алдынан хеҙмәт хаҡын белешә. Халыҡҡа файҙа килтергән нәмәне хаҡ ҡуймай, иҫәпләшмәй башҡарып өйрәнергә ваҡыт. Беҙҙең "Башҡортостан" киностудияһында тәү сиратта халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртҡан хеҙмәткәрҙәр эшләүе ҡыуандыра. Яҡшы матди-техник базаһы булған киностудияның бөтә мөмкинлектәрен ҡулланып, йыл да бер нисә документаль, нәфис һәм анимацион фильм төшөрөргә тырышабыҙ. Әлбиттә, билдәле киностудиялар кеүек тулы метрлы, ҙур бюджет талап иткән фильмдар сығара алмайбыҙ, шулай ҙа ҡулдан килгәнсә эшләйбеҙ. Тыуған яҡты данлаған, Башҡортостандың үҫешенә ҙур көс һалған әҙиптәр тураһында, балалар һәм үҫмерҙәргә яҡшы тәрбиә бирерлек сценарийҙарҙы һайлап алабыҙ. Сөнки "Башҡортостан" киностудияһының маҡсаттарының береһе - йәш быуындың яҙмышына ыңғай йоғонто яһау, дөрөҫ йүнәлеш биреү. "Әҙәпле артынан барһаң - әҙәм булырһың, әҙәпһеҙ артынан барһаң - әрәм булырһың", тип хаҡ әйтелгән. Шуға ла кино аша милләттәштәрҙе ваҡытлыса проблемаларға бирешеп, бөгөлөп төшмәҫкә, берҙәм, татыу һәм рухи яҡтан көслө булып ҡалырға өндәйбеҙ.

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙҙең ғаиләлә, ауылығыҙҙа, ҡала һәм райондарҙа хеҙмәт энтузиазмы тойоламы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәмзил БАЙНАЗАРОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ҡарамағындағы Йәштәр советы рәйесе:*** Байрам алды көндәре булғанлыҡтан, уны һәйбәт кәйеф, яҡты уйҙар менән ҡаршылағы килә. Белеүебеҙсә, 1 Май байрамы элек-электән тарихта бөтөн донъя хеҙмәтсәндәренең теләктәшлек байрамы булараҡ билдәлелек алған. Рәсәйҙә хәҙер был датаны Яҙ һәм хеҙмәт байрамы тип беләбеҙ. Нисек кенә итеп үҙгәртһәләр ҙә, был байрамдың төп асылы хеҙмәт менән бәйле булып ҡала. Был байрамға әҙерлекте беҙ апрелдә үк башлап ебәрҙек. Уҡыусы, студент һәм эшсе йәштәрҙең бөтәһен берләштереп, үткән йәкшәмбе көн Салауат Юлаев һәйкәле биләмәһен таҙартып, йыйыштырып алдыҡ. Йәштәргә әйт кенә - шундуҡ күтәреп алырға әҙер генә торалар тәҡдимде. Беҙ был эште йыл да шулай өмә рәүешендә башҡарабыҙ, хәҙер ул үҙенә күрә матур йолаға әүерелеп китте. Һорауығыҙға яуап итеп, шуны әйтәм: йәштәрҙә хеҙмәт энтузиазмы урғылып тора! Әйт һәм тейешле итеп ойоштор ғына. Хеҙмәт өмәһен Аксаков паркында күңелле мәҙәниял сараһы менән тамамлап ҡуйҙыҡ. Эштән һуң уйнарға ярай, тигән һымаҡ, башҡорт, рус, татар һәм башҡа милләт йәштәре вәкилдәрен дә саҡырып, бай эстәлекле концерт номерҙары менән сығыш яһап, күңел астыҡ.

***Фәрит ӘХМӘРОВ, журналистика ветераны, Сибай ҡалаһы:*** Яңыраҡ шулай Сибайҙан Аҡъярға барып ҡайтырға тура килде. Заманында бөтөн Рәсәйгә билдәле булған һәм"иген фабрикаһы" тип йөрөтөлгән "Йылайыр" совхозы, Хәйбулланың шулай уҡ даны таралған "Сиҙәм", "Таналыҡ" совхоздары биләмәләре аша 110 саҡрымлап юл үтеп тә, икһеҙ-сикһеҙ элекке иген баҫыуҙарында эшләп йөрөгән, исмаһам, бер генә трактор ҙа осрамауына аптыраным. Беҙҙең яҡтарҙа яҙ һуң килә - сәбәбе, ихтимал, шул да булғандыр. Ул сүрәттә лә бит дым ҡапларға, ужым ашларға, башҡа төр агротехник саралар үткәрергә ваҡыт еткән ине. Эргәмдә ултырып килгән юлдашым: "Хәҙер бит ер һөрмәйҙәр, ҡамылға сәсәләр ҙә - вәссәләм. Ямғыр яуһа - үҫә, яумаһа - юҡ. Элек сәсеүгә бөтөн халыҡ сыға ине, хәҙер биш-алты ғына кеше йөрөй. Былай барһа, белмәйем, бер нисә йылдан ауылда тракторға ултыртыр кеше лә тапмабыҙ... Ә бына һабантуйҙар үткәрергә ярабыҙ, бик дәррәүбеҙ ул яҡҡа. Ҡайҙарға ғына барып үткәрмәнек инде: Мәскәүгә лә, Төркиәгә лә хатта..." Был эпизод һеҙҙең әлеге энтузиазм тигән һорауығыҙға бер ни тиклем кимәлдә яуап була ала, минеңсә. Элек, әйе, көслө, ғәйрәтле ине ул урындарҙа күмәк хеҙмәт энтузиазмы. Эш кешеһенә, айырыуса хеҙмәт алдынғыларына ихтирам ҙур булды. Механизаторҙар, һауынсылар, малсыларҙың фотоһүрәттәре почет таҡтаһынан, гәзит биттәренән төшмәне. Социалистик Хеҙмәт Геройҙары йәш быуынға хеҙмәт тәрбиәһе биреүгә лә тос өлөш индерҙе, улар мәктәптәрҙә йыш ҡунаҡ була ине. Бөгөн, әйтеүемсә, баҫыу-ҡырҙарҙа, тәҙрәләре өңөрәйеп, емерелеп бөткән ферма харабаларында шомло тынлыҡ. Бәхеткә, бөтөн ерҙә лә улай түгелдер, әле бына апрель ахырының салт аяҙ, ҡояшлы тороуы күп райондарға яҙғы баҫыу эштәрен дәррәү башлап ебәрергә булышлыҡ иткәндер, тием. Дөрөҫөн әйткәндә, хеҙмәт энтузиазмы баҫыуҙарҙа ғына гөрләргә тейеш түгел, әлбиттә. Сибайҙа, мәҫәлән, шәмбе өмәләре гөрләп үтте. Ҡала урамдары таҙарып, яҡтырып ҡалғандай булды. Унан һуң хәҙер бит һәр кем үҙ көнөн күрә, тигәндәй, бөтөн тырышлыҡтар шәхси хужалыҡтарға, баҡса участкаларына күсте. Май байрамдарын халыҡ түҙемһеҙләнеп көтә. Әүҙемерәк граждандар демонстрацияға сығып, эш хаҡын, пенсиялар күләмен арттырыу, илдә эш урындары булдырыу, енәйәтселек, урлашыуҙарға ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барыу кәрәклеге хаҡындағы теләктәрен шунда белдереп ҡайта ала. Бының файҙаһыҙлығын аңлағандар үҙ көсө менән ғаилә аҫырау маҡсатында баҡсаһына барып бил бөгә, картуф, йәшелсә-емеш ултырта - эш етерлек унда ла. Мин дә машинамды көйләп, әҙерлек һыҙығына ҡуйғанмын, сөнки иртәгә - баҡсаға!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Йортоңда аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәң, "Киске Өфө" - шундай бер сара. Уға яҙылырға онотма һәм таныштарыңды ла был хаҡта иҫкәрт. Индекс - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 574 һум 32 тин. Ошо уҡ индекс менән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары 511 һум 02 тингә яҙыла ала.**

• Дәртләндереү саралары дауам итә. Гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын апрелдә ебәргәндәрҙән кемдәрҙер бүләккә **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма", "400 башҡорт халыҡ йыры", "Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** (русса) һәм башҡа китаптар алып ҡыуаныуы бик ихтимал.



• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфөматбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.

• Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog. kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Италия-Рәсәй төбәк-ара форумын асыуҙа сығыш яһаны. Абруйлы иҡтисади форумда Башҡортостандың рәсми делегацияһын республика Башлығы етәкләне. Был - Рөстәм Хәмитовтың Италияға өсөнсө рәсми сәфәре. Белешмә. Италия Башҡортостандың тышҡы сауҙа партнерҙары булған тәүге биш ил иҫәбенә инә. Һуңғы йылдарҙа үҙ-ара тауар әйләнеше артҡан. 1998-2014 йылдарҙа ул 84 тапҡырға үҫкән. Башҡортостанда Италия капиталы ҡатнашлығында ойошторолған 13 берлектәге предприятие эшләй.

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй комиссияһының дөйөм йыйылышында ҡатнашты, уны Рәсәйҙең сит ил эштәре министры Сергей Лавров алып барҙы. "Евразияла мәҙәни хеҙмәттәшлек буйынса даими платформа булдырыу йәһәтенән Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуына ярашлы, май айында Башҡортостанда "Евразия киңлегендә мәҙәни-ара диалог" тигән халыҡ-ара конференция ойошторола, - тип хәбәр итте Сергей Лавров. - Уның сиктәрендә "Ебәк юлы" ЮНЕСКО проекты линияһы буйынса мәҙәни-ара эш итеү мәсьәләһен тикшереү күҙаллана".

✔ Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының һуңғы мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә 63 мең гектар һөрөнтө ерҙә сәсеү эштәре башҡарылған, йәғни билдәләнгәндең өс проценты. Миәкә, Мәләүез, Әлшәй, Ҡырмыҫҡалы һәм Стәрлебаш райондарында сәсеү кампанияһы юғары темпта бара. Башҡортостан аграрийҙарына 3,160 миллион гектар ерҙә яҙғы сәсеү эштәрен башҡарыу бурысы тора. Шуларҙың 1,317 миллион гектарын иген культуралары тәшкил итәсәк. Техник культуралар 288 мең гектар майҙанды биләйәсәк. Шул иҫәптән, шәкәр сөгөлдөрө өсөн яҡынса 50 мең гектар, көнбағышҡа 200 меңдән ашыу ер бүленәсәк.

✔ Башҡортостанда өлкәндәргә хас ҡаһарманлыҡ ҡылған өс бала федераль наградаларға лайыҡ булды. "Ҡайнар йөрәк" билдәләрен республика буйынса Баш федераль инспектор Андрей Чечеватов тапшырҙы. Благовар районы Таллыкүл ауылынан туғыҙ йәшлек Айгөл Шәфиева ҡустыһы менән һеңлеһен янғандан, Белорет районынан 12 йәшлек Арсен Нәжметдинов һәм Стәрлетамаҡтан 16 йәшлек Михаил Алексеев һыуға батып барыусыларҙы ҡотҡарған өсөн награда алды.

***✓ Халҡыбыҙ иманға күнмәй тороп, ниндәй генә административ һәм башҡа саралар ҡулланыуға ҡарамаҫтан, кешелек донъяһын баҫып алған эскелек, наркоманлыҡ кеүек афәт менән көрәшеүҙең һөтижәләре булмаҫ һымаҡ.***



БЫЛ АЙҘА...

# МАЙ ЯМҒЫРЫ - ЕРГӘ МАЙ



**Май беҙҙең күңелдәрҙә иң сыуаҡ ай булараҡ йәшәй. Яҙҙың иң сағыу мәле булғанғамы, байрамдары күплектәнме, әллә ҡояш торошо йәйгелеккә ауышҡанға күрәме...**

Быйыл ай башында рәттән 4 көн байрам һәм ял көндәре тип иғлан ителде. **1 Май** - шулай итеп, күптән көтөлгән Яҙ һәм хеҙмәт байрамы. Халҡыбыҙ байрамдарҙы яратһа ла, был юлы кешелә әллә ни күңел асыу ҡайғыһы юҡ кеүек: күпселек баҡса участкаларына, дачаларына ашыға, православныйҙар пасха ҡаршылай. Ҡасандыр гөрләп торған хеҙмәт энтузиазмы хәҙер шәхси хужалыҡтар эсенә инеп бикләнде. Флагтар, транспаранттар күтәреп, демонстрацияға сығыуҙы ла бөгөн берәү бөгөн ишкелек ҡалдығына, совет заманы ғәҙәтенә тиңләй башланы. Ләкин бөтәһе лә былай уйламай: илдәге ауыр көрсөк, тауар хаҡтары менән эш хаҡтары араһындағы айырманың арта барыуы, эш урындары булдырыу кеүек мәсьәләләрҙе профсоюз ойошмалары тап ана шул демонстрацияға сығып, тағы бер тапҡыр көн тәртибенә ҡуймаҡсы. Иң мөһиме - хеҙмәттең тормошобоҙҙағы әһәмиәтен тергеҙеү, кешене эш менән тәьмин итеү талабы. Был көндәрҙә яңғыраясаҡ төп лозунг - бына ошолар.

**3 май** Ҡояш көнө билдәләнә. Был байрам 1994 йылда Халыҡ-ара ҡояш энергияһы йәмғиәте тарафынан булдырылған. Уның маҡсаты - Ер йөҙө интеллектуалдарын тәбиғәт тарафынан йомарт бүләк ителгән Ҡояш энергияһын мөмкин тиклем кинерәк файҙаланыу сараларын эҙләргә саҡырыу. Сөнки кешелек Ҡояштың да, дингеҙ тулҡындарының да, елдәрҙең дә, һыу ағымдарының да, һыу ҡалҡыуы менән ҡайтыуы кеүек тәбиғәт күренештәренең дә ғәйәт ҙур ҡеүәтен бик аҙ файҙалана әле. Ә шулай ҙа ҡояш батареяларын дача йорттарында һыу йылытыу өсөн һәм арзан электр энергияһы сифатында ҡулланыусылар байтаҡ. Майҙың тәүге ун көнлөгөндә метеорологтар ниндәй генә һауа торошо фаразлаһа ла, был көндәрҙәге оҙайлы ямғырҙарға ла шат булырға кәрәк, сөнки "Май ямғыры - ергә май" ти халыҡ һынамышы...

Енеү көнө (**9**) күңелебеҙгә бөтөн байрамдарҙан да яҡыныраҡ, өҫтөнөрәк. 1945 йылдың был шанлы көнө вәҡыт араһында беҙҙән алыҫлаша барған һайын, күңелдәребеҙгә, киреһенсә, яҡыная ғына бара кеүек. Ул бигерәк тә өлкән быуындар хәтерендә кисәгеләй нығ һаҡлана, ләкин Енеү көнө әһәмиәтен йәш быуын вәкилдәре лә үҙ йөрәктәре аша үткәреп баһалай белһен ине. Әйткәндәй, 2012 йылдың 9 майында Томск ҡалаһында башланып, артабан тотош Рәсәйҙе генә түгел, прогрессив кешелек йәшәгән башҡа сит илдәрҙе лә ялмап алған "Үлемһеҙ полк" акцияһының тәрбиәүи йөкөнтоһо иҫ киткес ҡеүәтле булыуын иҫкә алыу ҙа етәлер был йәһәттән. Ҡара көстәр ни генә ҡыланып, үҙ файҙаһына борорға маташмаһын, тарихты үҙгәртеү мөмкин булмаған хәл, сөнки ул йылъяҙма биттәренә миллиондар ҡаны менән яҙылған.

Халыҡ-ара әсә көнө (**12**) **15** майҙа билдәләнәсәк Халыҡ-ара ғаилә көнө менән айырылғыһыҙ бәйле икәнен дә күп тылҡып тороу кәрәкмәйҙер. Дөрөҫ, заман ауырлыҡтарына ла бәйле был төшөнсәләр: илдә демография һиҙелһының тоторокһоҙлоҡ сәбәптәрен оҙаҡҡа һүҙылған көрсөк лабиринттарынан эҙләү кәрәк, әлбиттә...

Май айында билдәләнәсәк иҫтәлекле көндәрҙең бер-береһе менән логик бәйләнештә булыуына тағы бер дәлил бар: Халыҡ-ара музейҙар көнөнөң (**18**) баш ҡалабыҙ Өфөлә Бөтөн Рәсәй китапханалар көнө (**27**) менән бергә үрелеп китеүе үҙе бер матур башланғыска нигеҙ һалды. "Музейҙар һәм китапханалар төндәре" йәштәрҙе илһөйәрҙәр итеп тә, шул уҡ ваҡытта мәҙәниәтле һәм уҡымышлы шәхестәр итеп тә тәрбиәләүҙә матур йолаларыбыҙҙың береһенә әйләнер, тигән өмөт бар.

Майҙың һуңғы көнө (**31**) Бөтөн донъя тәмәкеһеҙ көн булараҡ билдәле. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, Ер йөҙөндә йыл һайын ошо яман ғәҙәткә бәйле сирҙәрҙән 5 миллион кеше яҡты донъя менән хушлаша. Шул уҡ ваҡытта тәмәкеһеҙ бер көн йәмғиәтебеҙ тормошонда бер ниндәй эҙһеҙ, йөгөнтоһоҙ ғына үтеп тә китә. Был йәһәттән дә ниндәйҙер тәьҫирле саралар уйлап сығарып, фантазияны эшкә егергә күптән ваҡыттыр, могайын.

Май юбилейҙарға ла емешле генә ай икән дә:

**1** - педагог, РСФСР һәм БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, Ленин, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары кавалеры **Бәҙри Мәмбәтколовтың** (1911-2001) тыуыуына 105 йыл.

**5** - бейеүсе, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Хазина Мағазованың** (1916-1998) тыуыуына 100 йыл.

**14** - яҙыусы **Мәхмүт Һибәткә** 80 йәш.

**15** - бейеүсе, Башҡортостандың халыҡ артисы **Зөлфиә Ҡудашеваға** 60 йәш.

**25** - яҙыусы **Мөкәрәмә Садиковаға** 85 йәш.

**26** - композитор **Ләйлә Исмәгилеваға** 70 йәш.

**27** - вокалистар педагогы, профессор **Миләүшә Мортазинаға** 90 йәш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# УЛДЫР - ӘҘӘМИ ШАЙТАН...



**Гәзитебеҙҙең 12-се һанында Фариза Мөхәррәмованың "Килешмәйем" рубрикаһы аҫтында сыҡҡан "Тағы ла шул... эскелек тураһында" исемле мәҡәләһен уҡып сыҡҡандан һуң, сираттағы мәртәбә ҡәләмемде ҡулға алмай булдыра алманым.**

Илебеҙҙә киң таралған эскелек, наркоманлыҡ тигән афәттәр хаҡында әсенеп яҙғандан һуң, шул бәләләргә ҡаршы көрәштең "бер генә юлын" кәңәш итә автор, "ул да булһа, әлеге лә баяғы тыйыу (сикләү, ҡаты контроль, административ саралар, мәжбүри дауаланыу)". Ошо юҫыҡта ифрат та һүлпән эшләгән ауыл хакимиәттәрен, йәмәғәтселекте ныҡ ҡына тәнҡит утына ла тота. Һәр төрлө тәрбиәүи-мәҙәни эштәрҙе гөрләтеп алып барырҙай хакимиәт башлыҡтарында эскелектән ҡотҡарыусыны күрә Фариза һылыу. Һүҙ юҡ, Фаризаның ниәте яҡшы, әммә был ҡый үләнен бөтөрөү ниәте менән уның тик һабағын ғына өҙгөләп сығыуҙы кәңәш итеүгә оҡшай...

Бына ошо юлдарҙы ғына яҙып өлгөрҙөм дә, гәзитебеҙҙең артабанғы материалдарын ҡараштырыуымды дауам итәм, һәм... 12-се биттәге "Замана беҙгә бәйлеме, әллә беҙ - заманағамы?" исемле мәҡәләгә юлығам. Уны Сибай ҡалаһынан Нәзиә Бикбова яҙған. Гәзит мөхәррирлигенең ошо ике мәҡәләне бер гәзиттә сығарыуы бигерәк тә йәтеш булған бит! Әйтерһең дә, мәҡәлә авторҙарының тәүгеһе бик мөһим һорау ҡуя, көнүҙәк проблеманы аса, ә икенсеһе, төплө белемле кеше булараҡ, уға өҙөп кенә, ифрат та тапҡыр итеп яуап бирә. Динебеҙҙең ҡанундарына, шәхсән, изге Ҡөрьән Кәримдең талаптарына таяныл яҙылған был мәҡәлә: "Ҡый үләненән ҡотолам тиһәң, уны өҫтән-мөҫтән генә өҙгөләмә, ә тамырынан йолҡоп ташла, һәм унда башҡаса ҡый үрсеүгә юл бирмәҫлек файҙалы культуралар ултырт!" - тигән һымаҡ яңғырай.

Ысынлап та, халҡыбыҙ иманға күнмәй тороп, ниндәй генә административ һәм башҡа саралар ҡулланыуға ҡарамаҫтан, кешелек донъяһын баҫып алған эскелек, наркоманлыҡ кеүек афәт менән көрәшеүҙең нәтижәләре булмаҫ һымаҡ. Аллаһ илсеһе ғәләйһиссәләм өйрәткән хаҡ диндә милләттәштәребеҙ барыһы ла тоткан дәүерҙә беҙҙә эскелек булмаған. Кемдер берәү ситкә китеп, хәмергә өйрәнеп ҡайта икән, уны "зимагор" тип атағандар. Бар ауыл кешеһе уға оторо ҡаршы торған.

*...Иҫереккә бирмә сәләм,*
*Ҡушмағыл яҡшы кәләм.*
*Улдыр - әҙәми шайтан*
*Аллаһ, дигел, бәдәүәм...*

Ураҙа, ҡорбан ғәйеттәре кеүек хәләл мәжлестәрҙә бына шундай мөнәжәттәр сығарып уҡыған беҙҙең милләттәштәр. Ә Октябрь революцияһы булып, илдә динһеҙлек дәүере башланғас та:

*Эсеп ебәр һалғанын,*
*Һорама ҡайҙан алғанын...-*

тигән кеүегерәк йырҙар йырлай башлаған яҡташтарыбыҙ. Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың, тигәндәй. Әле лә күптәребеҙ, үкенескә, ана шул арбанан алыҫлашырға йыйынмай. Һаман да диндә ишкелек ҡалдығы тип һанап, хәҙергесә, "мәҙәни" рәүештә булһа ла, хәмерҙе өҫтәлдән төшөрмәй күпселек. Ә хәмерҙе ҡәтги тыйған Ҡөрьән Кәрим, Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссәләм аша беҙгә бирелгән хаҡ динебеҙ талаптары һис бер үҙгәреүһеҙ ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәре барасаҡ, иншаллаһ.

"...Эскелек, наркоманлыҡ, суицидты бер-береһенән айырып ҡарау, һәр береһенең сәбәптәрен айырым эҙләп, уларҙан ҡотолоу сараларын табырға маташыуҙан бер фәтүә лә сыҡмаясаҡ, сөнки былар барыһы ла иман зәғифлегенән килгән ауырыуҙар... - тип яҙа автор Нәзиә Бикбова. - Тән ауырыуында табиптарға мөрәжәғәт итһәк тә, йән ауырыуҙарынан һауыҡтырыусы табип әлегә Ер йөҙөндә юҡ. Йән дауаһы берәү генә - заманаға һылтанмай, үҙ динеңде ихтирам итеү, өйрәнеү..." Алтын һүҙҙәр! Артабан был мәҡәләне тәфсирләүҙең кәрәге юҡтыр, тип уйлайым. Гәзиттең 12-се һанындағы шул мәҡәләне ҡабаттан табып, ҡат-ҡат уҡып сығыуҙы әле. Нәзиә ханымдың был мәҡәләһен гәзит биттәрендә йыл һайын ҡабатлап баҫып торғанда милләттәштәребеҙ өсөн бигерәк тә файҙалы булыр ине.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә "Үлемһеҙ полк" акцияһын үткәреү барышында Октябрь проспектының бер өлөшө ябыла. Ҡала хакимиәте сайтында баҫылған документтан күренеүенсә, 6 майҙа иртәнге сәғәт 11-ҙән көндөҙгө 1-гә тиклем Октябрь проспектының бер өлөшөндә - Шәфиев урамынан алып Кольская урамына тиклем транспорт хәрәкәте туҡтатыла. Пассажирҙар автобусы һәм электр транспорты хәрәкәтенең схемаһын үҙгәртеү Өфө хакимиәтенең Транспорт һәм элемтә идарыһына йөкмәтелгән. 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 71 йыллығына арналған тантаналы йөрөштө үткәреү барышында юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында тейешле саралар ҡабул ителәсәк.

✓Ташҡын көмәүгә бара. Был хаҡта баш ҡала хакимиәтенең Граждандарҙы яҡлау идарыһы етәксеһе Рәсим Абдуллин хәбәр итте. "Өфө биләмәһендә әле 50 йорт - һыу аҫтында. Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары ташыуҙан туҡтаны тиерлек", - тине Рәсим Абдуллин. Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров һүҙҙәренсә, хәҙер ташҡын эҙемтәләрен бөтөрөү ташҡынға ҡаршы сараларҙың төп фазаһы буласаҡ.

✓Май байрамдарында республиканың почта бүлексәләре айырым график буйынса эшләй. 30 апрелдә һәм 8 майҙа почта элемтәһе бүлексәләре ғәҙәти график буйынса эшләй, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Дүшәмбе, 2 майҙа, почта бүлексәләре йәкшәмбе режимы буйынса хеҙмәтләндерә. Шишәмбе, 3 майҙа, почта шәмбе режимы буйынса эшләй. 4, 5, 6 һәм 7 майҙа бөтә бүлексәләр ҙә ғәҙәти график буйынса хеҙмәтләндерә. 1, 3, 9 һәм 10 май - ял көндәре.

✓Башҡортостан халҡын Өфө амфитеатрына "UFA - Kuraifest" исемле яңы проектҡа саҡыралар. Сара 27 майҙа "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале сиктәрендә уҙа. Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, киске сәғәт 7-нән төнгө 11-гә тиклем амфитеатр ҙур фестиваль майҙансығына әүереләсәк. Музыкаль форум бай мәҙәни программа менән тамашасыларҙы таң ҡалдырырға йыйына. Фестиваль программаһының төп геройы - ҡурай. Этно-рок төркөмдәр, джаз музыканттары, төбәктәге танылған коллективтар сығыш яһай.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА...



# ТӘРТИП ҺАҒЫНДАБЫҘ, ТӨҘӨКЛӘНДЕРӘБЕҘ

✓ Өфөлә "Хоҡуҡ тәртибе" халыҡ дружинаһы уңышлы эшләй. Әлеге ваҡытта уның сафында 300 кеше иҫәпләнә. Ҡаланың 97 предприятиеһы һәм ойошмаһы базаһында шундай командалар ойошторола. Былтыр октябрь-декабрҙә ирекмәндәр 100 тапҡыр йәмәғәт тәртибен һаҡлауға сыҡҡан. Полиция менән берлектәге сараларҙа улар 405 административ хоҡуҡ боҙоуҙы, шул иҫәптән 70 ваҡ хулиганлыҡты иҫкәрткән. 96 кеше йәмәғәт урындарында эскән килеш тотолған. Халыҡ дружиналарын үҫтереү көн үҙәгендә тора, сөнки әлегә урамдарҙа һәм йәмәғәт урындарында ҡылынған енәйәттәр кәмемәй.

✓ Баш ҡала территорияһын санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса айлыҡ сиктәрендә урамдарҙы яҡтыртыу системаларын һәм светофорҙарҙы йыуыу, буяу һәм башҡа төҙөкләндереү эштәре башҡарыла. Быйыл "Өфө ҡала уты" МУЭСП муниципаль предприятиеһы парктарҙа һәм скверҙарҙа барлығы 9000 таяуҙы, 175 тумбаны, 1000 торшер терәүен, 750-нән ашыу светофор таяуын, 450 туҡланыу пунктын, 155 светофор шкафын тәртипкә килтерәсәк.

✓ Быйылғы төҙөлөш миҙгелендә Киров, Амур, Чапаев, Крәҫтиән урамдарында киң ҡоласлы ремонт һәм төҙөкләндереү эштәре ҡайнаясаҡ. Уларҙа урамдар киңәйтелә, йәйәүлеләр йөрөгән юлдар яҡшыртыла, бордюр таштары ҡуйыла, тышҡы яҡтыртыу системаһы модернизациялана, машиналарҙы парковкалау урындары булдырыла, тротуарҙар асфальтлана. Бөтә был эштәр ҙә хәрәкәтләнеү мөмкинлектәре сикләнгән халыҡ төркөмөнөң талаптарын күҙ уңында тотоп эшләнә. Эштәрҙе май һуңында тамамлау күҙаллана.

✓ Территорияларҙы төҙөкләндереү һәм уңайлы мөхит булдырыуға ҡала округы хакимиәте ҙур иғтибар бүлә. Был эштең бер йүнәлеше булып йәмәғәт транспорты туҡталыштарындағы павильондарҙы яңыртыу һәм яңыларын ҡуйыу тора. Һуңғы ике йылда инвесторҙар тарафынан 70-кә яҡын конструкция ҡуйылһа, киләсәктә был һан 116-ға етәсәк.

✓ Баш ҡалала терроризмға ҡаршы ҡала комиссияһының сираттағы ултырышы үтте. Комиссия эшендә ҡатнашыусылар террорға һәм экстремизмға ҡаршы йөкмәткеле документаль һәм художестволы фильмдарҙы таратыу өсөн кинопрокат системаһын йәлеп итергә кәрәклеген билдәләне. Шулай уҡ халыҡ күпләп йөрөгән урындарҙы һәм объекттарҙы терроризм күренешенән һаҡлау, дини ойошмалар менән берлектә конфессия-ара татыулыҡты нығытыу, Бөйөк Еңеүҙең 71 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек һәм уны үткәреү ваҡытында граждандарҙың именлеген, йәмәғәт тәртибен һаҡлау сараларын тәьмин итеү мәсьәләләре ҡаралды.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# РӘСӘЙ-ИРАН ФОРУМЫ



**2017 йылдың апрель айында, Наурузды байрам иткән көндәрҙә, Өфөлә "Ебәк юлының алтын ептәре" Рәсәй-Иран форумы уҙғарыла, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтендә.**

"Өфө форумы халҡыбыҙҙың мәҙәниәте һәм милли традициялары тураһында ике илдә йәшәүселәрҙең мәғлүмәтлелеге йәһәтенән Рәсәй менән Ирандың яҡынайыуына, шулай уҡ сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк", - тип билдәләне Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов. Милләттәр эше буйынса федераль агентлыҡ Рәсәйҙә Иран Ислам Республикаһы төбәктәре һәм Рәсәйҙең Урал, Волга буйы субъекттары хеҙмәттәшлегенең социаль-иҡтисади форумын үткәреү башланғысы менән сығыш яһаны. Бындай тәҡдим Милләттәр эше буйынса федераль агентлыҡ етәксеһе Игорь Баринов етәкселегендәге Рәсәй делегацияһының Иранға сәфәре барышында яңғыраны. Делегация составында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов та бар ине. Игорь Баринов һүҙҙәренсә, Башҡортостан форумды ойоштороу майҙансығы булараҡ ҡарала. Урта Урал тәү сиратта форумдың иҡтисади өлөшөн үҙ өҫтөнә алырға мөмкин. Тикшереләсәк мәсьәләләр иҫәбендә юғары уҡыу йорттары араһында үҙ-ара килешеп эш итеү, Ислам белеме һәм экстремизмға ҡаршы тороу бар.

# ГЕОРГИЙ ТАҪМАЛАРЫ ТАРАТЫЛА



**Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 71 йыллығына арналған "Георгий таҫмаһы" патриотик акцияһы башланды. Хәтер һәм хәрби дан символын "Өфө" универмагы алдындағы майҙанда "Еңеү ирекмәндәре" хәрәкәте ағзалары, баш ҡаланың хәрби-патриотик һәм үҫмерҙәр клубы тәрбиәләнеүселәре тапшырҙы. 9 майға тиклем бөтәһе 20 меңдән ашыу Георгий таҫмаларын таратыу күҙаллана.**

Георгий таҫмаларын таратыу "Еңеү йырҙары" исемле концерт программаһы һәм "Әфлисун" клубтар берләшмәһенән хәрби-тарихи тамаша менән оҙатып барылды. Өфөләр "Хәрби Дан күргәҙмәһен", "Төнгө бүреләр" Бөтә Рәсәй мотоклубы Өфөләге бүлексәһенең сығышын ҡараны. "Георгий таҫмаһы" акцияһы Рәсәйҙә тәүге тапҡыр 2005 йылдың яҙында ойошторола. Киләһе йылда уҡ ул бөтә Рәсәй статусын ала. Георгий таҫмаһының төҫтәре Бөйөк Ватан һуғышының төп наградаларының береһе - Дан орденын булдырғанда файҙаланылды.

# ИҪӘП АЛЫУСЫЛАР БИЛДӘЛӘНДЕ

**Башҡортостанға 2016 йылда Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу өсөн федераль ҡаҙнанан 57 миллион һум самаһы аҡса бүленә. Башҡортостан Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә республика буйынса Федераль дәүләт статистика хеҙмәте етәксеһе Әкрәм Ғәниев ошо хаҡта хәбәр итте.**

"Башҡортостан Республикаһы законына ярашлы, муниципаль район һәм ҡала округтарының урындағы үҙидара органдарына Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыуға әҙерләнеү һәм уны үткәреү буйынса Рәсәйҙең түбәндәге вәкәләттәре тапшырылған: иҫәп алыусыларҙың уҡыуы, эше өсөн ярайлы биналар әҙерләү, иҫәп алыу ҡағыҙҙарын һаҡлау, транспорт саралары менән тәьмин итеү, элемтә хеҙмәттәре күрһәтеү. Дөйөм алғанда, ошо сығымдарға 57 миллион һум самаһы аҡса ҡаралған. Шулай итеп, ҡала округына йәки муниципаль районға бер миллион һумдан аҙыраҡ аҡса бүленә, улар субвенция рәүешендә бирелә", - тине Әкрәм Ғәниев.

Башҡортостанстат етәксеһе әйтеүенсә, республикала иҫәп алыусыларҙы йыйыу тамамланыуға яҡынлаша. Бөтәһе 2,5 мең кеше иҫәп алыусы булып эшләйәсәк. Төбәктә 1234 ауыл хужалығы ойошмаһы, 4790 крәҫтиән (фермер) хужалыҡтары һәм шәхси эшҡыуарҙар, 673 мең шәхси ярҙамсы хужалыҡтар һәм 31,5 мең баҡсасылыҡ, йәшелсәселек һәм дача берекмәләре ауыл хужалығы иҫәбен алыу объекттары буласаҡ. 2016 йылдың 1 июленән 15 августына тиклем Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу уҙғарыла. Тикшереүҙең яҡынса һөҙөмтәләре 2017 йылдың дүртенсе кварталында билдәле буласаҡ. Сараға йомғаҡ 2018 йылда яһала.

# ИҪКЕНӘН - ЯҢЫҒА



**Башҡортостан Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалауға булышлыҡ итеү фондына граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан күсереү программаһының һуңғы этабын бойомға ашырыу өсөн финанс ярҙамы алыуға ғариза бирҙе. Аҙаҡҡы этап 2016-2017 йылдарға иҫәпләнгән.**

Ошо ғаризаға ярашлы, республика дәүләт корпорацияһынан 1,7 миллиард һум аҡса алырға ниәтләй. Уларҙы 25 муниципаль берәмек биләмәһендә граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан күсереүгә йүнәлтеү күҙ уңында тотола. 2008-2015 йылдарҙа Башҡортостанда күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлау һәм граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан күсереү программаларын тормошҡа ашырыу өсөн фондтан бөтәһе 15,14 миллиард һум аҡса бүленгән. Берлектә финанслау тәртибендә төбәк 10,79 миллиард һум өҫтәгән. Аҡса 1 384 күп фатирлы йорттарҙа капиталь ремонт үткәреүгә һәм 249 540 кешенең йәшәү шарттарын яҡшыртыуға, шулай уҡ 36 587 гражданды авария хәлендәге торлаҡтан күсереүгә тотонолған.

# ҠАЛА УСТАВЫ ҮҘГӘРЕРМЕ?



**Ҡала мәҙәниәт йортонда ҡала Советы Уставына үҙгәрештәр индереү ҡарары проекты буйынса асыҡ тыңлауҙар үтте.**

Төп үҙгәрештәр Советтың вәкәләттәр мөҙҙәтен дүрт йылдан биш йылғаса оҙайтыуға һәм ҡала Советына һайлауҙар ваҡытында кандидаттар тәҡдим итеүҙе РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙар ваҡытында ҡулланылған системаға ярашлаштырыуға ҡағыла. Асыҡ тыңлауҙарҙа барлығы 636 кеше ҡатнашты, быға тиклем 23 кеше яҙма мөрәжәғәт ебәргәйне. Тәҡдим ителгән проект буйынса фекер алышыуҙа өс кеше: ҡала Советында КПРФ фракцияһы вәкиле Рөстәм Хафизов, шул уҡ партия ағзаһы Булат Сафин, "Йәшелдәр" Рәсәй экологик партияһының рәйес урынбаҫары Руфина Шаһапова сығыш яһаны. Улар барыһы ла бер тауыштан тәҡдим ителгән үҙгәрештәрҙе хупланы, яңы шарттар күберәк сәйәси фирҡәгә ҡала Советында үҙ вәкиллеген булдырыу мөмкинлеген бирәсәк, тип белдерҙе. Депутаттар, асыҡ тыңлауҙар һөҙөмтәһен иҫәпкә алып, ҡала Советына үҙгәрештәр индереүҙе сираттағы ултырышта ҡабул итәсәк.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Санкт-Петербургтан килгән подрядсы Өфө-Аэропорт автомобиль юлында юл япмаһын ремонтлай башланы. Атап әйткәндә, юлдың асфальтты механик зыян күреүҙән һаҡлаусы һәм дымға юл япмаһының тәрән ҡатламына үтеп инергә мөмкинлек бирмәгән һаҡлағыс ҡатламы яңыртыла. Технология буйынса тәүҙә ремонтланасаҡ участкаға грунт, һуңынан һаҡлағыс ҡатлам түшәлә. Яҡын көндәрҙә Зәки Вәлиди урамында шундай уҡ эштәр үткәреләсәк.

✓ Астана һәм Өфө араһында туғандашлыҡ тураһында килешеүгә 2016 йылда ҡул ҡуйыласаҡ. Өфө хакимиәтенең рәсми делегацияһы Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астанала булып ҡайтты. Сәфәрҙең маҡсаты иҡтисад, инвестиция мәсьәләләрендә, предприятиелар эшен ойоштороу һәм тариф көйләүе өлкәһендә тәжрибә уртаҡлашыу ине.

✓ Башҡортостанда Радиация аварияларны һәм һәләкәттәре эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашыусылар көнө билдәләнде. Чернобыль атом электр станцияһындағы фажиғә эҙемтәләрен бөтөрөүҙә Башҡортостандан 12 мең кеше ҡатнаша. Бөгөн республикала 2400 самаһы ликвидатор йәшәй.

✓ Магнитогорск хакимиәтендә Урал аръяғы эшҡыуарҙарының ҡаланың бизнес берләшмәһе вәкилдәре менән осрашыуы уҙҙы. Сара Башҡортостан Хөкүмәте менән Силәбе өлкәһе Хөкүмәте араһында сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник, социаль һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһында төҙөлгән килешеү сиктәрендә үткәрелде. Килешеүҙең төп маҡсаты - төбәк-ара һәм муниципаль-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереү.

✓ Бөгөн Өфөләге мәшғүллек хеҙмәтендә һигеҙ мең кеше иҫәптә тора. Шуларҙың ете меңе - эшһеҙ. Әлеге ваҡытта республиканың баш ҡалаһында 562 мең иҡтисади яҡтан әүҙем халыҡ йәшәй. Өфөләге Халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә хәбәр итеүҙәренсә, ҡаланың вакансиялар банкында 7,8 мең буш эш урыны хаҡында мәғлүмәт бар.

✓ Ошо көндәрҙә Чернобыль атом электр станцияһындағы фажиғәгә 30 йыл тулды. Был көндә Рәсәйҙә авария эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашҡандарҙы иҫкә алдылар. Башҡортостанда радиация тәьҫиренә дусар булған 3500 самаһы кеше йәшәй. Шуларҙың 2400-ө тиерлек Чернобыль атом электр станцияһындағы фажиғә һөҙөмтәһендә зыян күргән.

✓ *Әлбиттә, музыка мәктәбендә уҡыусыларҙың күбеһе сәнғәт юлынан да китмәҫ, музыкант та булмаҫ. Әммә уларҙың тормошо яҡты булырына ышаныс ҙур.*



АФАРИН!

# ТУҒАН ТЕЛДӘ...

## диктант яҙҙыҡ

**Үткән аҙнала Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты ойошторған "Башҡорт теленән региональ диктант" акцияһы үтте. Белемен тикшереп ҡарарға теләүселәр иғтибарына Ноғман Мусиндың "Мәңгелек урман" романынан алынған өҙөк тәҡдим ителде. Тексты Башҡортостандың халыҡ артисы Әхәт Мортазин уҡыны.**



Ойоштороусылар был сараның әһәмиәтен башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләләренә йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү, грамоталы яҙыу мәҙәниәтен үҫтереү, һәр кешегә үҙ белемен тикшереп ҡарау мөмкинлеге биреүҙә тип баһалай. Әммә быйыл ул фекерҙәш, битараф булмаған милләттәштәрҙе бергә йыйған акцияға әүерелде. Мәктәп уҡыусылары, студенттар ғына түгел, бынан бик күп йылдар элек уҡыуҙы тамамлаған оло йәштәге кешеләр ҙә ихлас күңелдән диктант яҙырға килде.

- Баймаҡ районының Икенсе Этҡол ауылында йәшәһәк тә, атайым мине ни сәбәптәндер рус мәктәбенә уҡырға биргән. Башҡорт теленең грамматикаһын гәзит-журналдар, китаптар уҡып ҡына өйрәндем, шуға диктанттың тексы ауыр ғына тойолдо. Әйтергә кәрәк, минең кеүек алтынсы тиҫтәне уҙғас, туған телен белеү кимәлен һынап ҡарарға теләгән кешеләр өсөн был сараның әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ, - тине ҡатнашыусыларҙың береһе Гөлсирә Хажимөхәмәтова.

Шуны билдәләргә кәрәк, былтыр бөтәһе 3505 кеше ойоштороу пункттарына килеп, башҡорт теленән диктант яҙған, быйыл тағы ла күберәк булыр, тип көтөлә. Әлегә Башҡорт дәүләт университетында һәм уның Стәрлетамаҡ, Бөрө, Нефтекама һәм Сибай филиалдарында барыһы 710 эш тикшерелгән. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетында 74 кеше диктант яҙған. Республиканың төрлө райондарынан да яйлап мәғлүмәттәр туплана башлаған. Мәҫәлән, Әбйәлил районының Асҡар ауылында диктант яҙыу пунктына 53 кеше, Архангел районы мәктәптәренең береһенә - 57, Ҡыйғы районында 31 кеше килгән. Быйыл хатта Силәбе өлкәһенең Златоуст ҡалаһы технологиялар һәм иҡтисад техникумы ла акцияға ҡушылған, унда 12 кеше диктант яҙып, белемен һынаған. Өфө ҡалаһының мәктәп һәм колледждарынан тулы мәғлүмәттәр әлегә килеп етмәгән.

- Үҙаллы, онлайн режимда яҙыусылар күп. Былтыр хатта персональ ҡулланыусылар һаны биш меңдән артып китеү сәбәпле бәйләнеш өҙөлдө. Быйыл бөтә ошо етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алдыҡ, техник йәһәттән барыһы ла яҡшы үтте. Хәҙер диктанттарҙы тикшерәһе генә ҡалды, - ти БДУ-ның башҡорт тел ғилеме һәм этно-мәҙәни белем биреү кафедраһы мөдире Рәмилә Хөснөтдинова. Башҡорт теле буйынса диктант һөҙөмтәләре тулыһынса ошо көндәрҙә **regdict.bashedu.ru** сайтына ҡуйылды. Диктант яҙыусылар һөҙөмтәне ошо сайтҡа инеп тикшерә ала.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# МИЛЛИ РУХҠА ЛА ҺЫНАУ...



**Өфөнөң Әҙеһәм Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбенең Башҡорт дәүләт филармонияһының ҙур залында уҙған отчет концерты ысын мәғәнәһендәге рухиәт байрамына әүерелде.**

Затон биҫтәһендәге был мәктәп 1966-ла асылып, 2008 йылда уға күренекле педагог, атаҡлы ҡурайсы, бик күп ҡурайсыларҙың уҡытыусыһы Әҙеһәм Исҡужин исеме бирелгәйне. Әйтергә кәрәк, музыка мәктәбенең 50 йыллыҡ юбилейына арналған был отчет концерты бер үк ваҡытта уға атаҡлы ҡурайсы исеме юҡҡа бирелмәүен дә иҫбат итте. Концертта яңғыраған башҡорт номерҙары башҡарылышы, профессиональ кимәле буйынса донъя һәм урыҫ классик музыкаһынан һис тә ҡалышманы. Бында, әлбиттә, башҡорт музыкаһы буйынса уҡытыусылар Гөлсәсәк менән Заһир Шәһәрғәзиндарҙың баһалап бөткөһөҙ хеҙмәте бар. Улар ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә музыка мәктәбендә башҡорт музыка ҡоралдары оркестры, ҡурайсылар һәм ҡыл ҡумыҙсылар ансамблдәре төҙөүгә өлгәшкән.

Музыка мәктәбен юбилейы уңайынан тәбрикләргә Ленин районы хакимиәте башлығы Альбина Йосопова менән уның социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Мирхәт Ҡаҙарғолов килде. Исҡужинсыларҙың коллегалары, Өфөнөң музыка мәктәптәре директорҙары 9-сы музыка мәктәбенең тиҙ арала ағас бинанан заманса бинаға күсеүен теләне. Әлбиттә, музыка мәктәбендә уҡыусыларҙың күбеһе сәнғәт юлынан да китмәҫ, музыкант та булмаҫ. Әммә уларҙың тормошо яҡты булырына ышаныс ҙур.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ

# МЕҢ ТАПҠЫР ИШЕТКӘНСЕ...

**Картанан ҡарап ҡына Башҡортостан тураһында ниндәйҙер мәғлүмәт алыу мөмкин түгел - ул бер нәмә лә һөйләмәй, уны тулыһынса күҙ алдына баҫтырыу мөмкинлеген бирмәй. Бары тик машинала Өфөнән Янғантауға, ошо шифахана базаһында үтәсәк вики-семинарға барғанда ғына ата-бабаларығыҙ йәшәгән яландарҙың сикһеҙлеген, тауҙарҙың бейеклеген һоҡланып күҙәттем.**

Китаптарҙа һүрәтләнгән тарихи шәхестәрҙе лә күҙ алдына килтереү өсөн уларҙың тыуған ерендә булырға, улар һулаған һауаны һуларға кәрәк икән. Салауат районы үҙәгендә урынлашҡан Салауат Юлаев музейына сәфәр ҡылғандан һуң, кешеләрҙең ни тиклем көслө рухлы, рус дәүләте һәм күршеләш йәшәгән халыҡтар менән мөнәсәбәттәрҙең ни тиклем ҡатмарлы булыуын аңланым. Имеш-мимештәр, өҙөк-йыртыҡ мәғлүмәттәр ғалимдарҙың теге йәки был хеҙмәтендә нимәгә йүнәлеш тотоуын асып бирмәй. БашВики хакимы Зөфәр Сәлихов башҡорттарҙың шәжәрәһе буйынса бүләк иткән китап менән танышып сыҡҡас ҡына Өфө менән Ҡаҙандың тарихи фәнни мәктәптәренең ни өсөн берберeһенә ҡапма-ҡаршы тороуын бер ни тиклем төшөнә башланым.

Шулай уҡ башҡорт Википедияһының ҡоро статистикаһы ла, мәҡәләләрҙең беҙҙекенә ҡарағанда күберәк булыуына көнләшеүҙән тыш, бер нәмә лә бирмәй. Хәҙер инде мин шуны аңланым: башҡорт вики-ойоштороусылары кешеләрҙе дәртләндерә, илһамландыра алған. Быны уларҙың ҡыҙыҡһыныуынан, һөҙөмтәгә йүнәлеш тотоуынан, янып торған күҙҙәренән, эш барышында үҙ-ара бәхәсләшеп, һуңынан уртаҡ фекергә килеүҙәренән дә күрергә мөмкин ине. Юҡҡа ғына, мең тапҡыр ишеткәнгә ҡарағанда, бер тапҡыр күреүең яҡшы, тимәйҙәр.

Ғөмүмән, Башҡортостан викимедистары менән икенсе тапҡыр осрашам, беренсе тапҡыр былтыр Вики-Һабантуйҙа булырға тура килгәйне. Ә инде ойошманы тотоп тороусы өс таған - Рөстәм Нурыев, Зөфәр Сәлихов һәм Азат Хәлилов менән бынан дүрт йыл элек Алматыла, төрки телле викийәмғиәттәр осрашыуында танышҡайныҡ. Шунан һуң бәйләнештәр нығынғандан-нығынды ғына. Осрашҡан һайын нимәләр һоҡландыра, ғәжәпләндерә. Әлбиттә, бындай осрашыуҙар бик мөһим һәм кәрәкле. Улар башҡорт Википедияһы өсөн дә мөһим, сөнки виртуаль мөнәсәбәттәрҙе ысынбарлыҡҡа күсерә, килеп тыуған мәсьәләләрҙе тиҙерәк һәм дөрөҫөрәк хәл итеү мөмкинлеген бирә. Шулай уҡ бындай осрашыуҙар беҙгә - башҡа телдәрҙәге вики-проекттар, Викимедиа.Ру вәкилдәренә лә кәрәк.

Башҡортостан викимедистары үҙенә ҙур социаль функция йөкмәгән - телдең статусын нығыта, йәштәрҙе телгә ылыҡтыра, лингвистик бурыстарҙы, мәҫәлән, телдең терминологик аппаратын үҫтерә, башҡара.

**Николай ПАВЛОВ,**
**Викимедиа.РУ ағзаһы.**
**Саха Республикаһы Якутск ҡалаһы.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тонзиллит

❖ Тонзиллит - аңҡау миндалинаһының шешеүе һалҡын ваҡытта йышыраҡ осрай. Был саҡта ел һуғыуҙан, өшөүҙән һаҡланырға, үҙегеҙҙе насар тойоу менән тамаҡты шалфей һәм эвкалипт төнәтмәһе менән сайҡатырға. Төнәтмә өсөн яртышар балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә.

❖ Тонзиллит һәм ангина мәлендә ҡыҙыл сөгөлдөр һуты шифалы. 1 ҡалаҡ һутты 1 стакан йылы һыуға өҫтәп, ярты стаканын эсергә, яртыһын тамаҡты сайҡатыу өсөн ҡулланырға. Йоҡлар алдынан һарымһаҡ ашарға, табан һәм сираҡҡа горчичник ҡуйырға.

❖ 2 ҡалаҡ шалфей, 1-әр ҡалаҡ ҡарағай бөрөһө, әнис орлоғо, эвкалипт япрағы, бөтнөк япрағы, аҡ сәскә, календула, кейәү үләнен бергә ҡушып болғатып, 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтеп, һөҙөргә һәм тамаҡты сайҡатырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр, ашағандан һуң һәм төнгөлөккә эшләргә.

❖ Миндалинанан эренде алып торорға кәрәк. Ҡырғыстан үткәрелгән 2 ҡалаҡ кишергә 1 ҡалаҡ бал, 5-15 тамсы (ауырыуҙың йәшенә ҡарап) прополис төнәтмәһе, 0,5 мл 5 процентлы аскорбин кислотаһы иҙелмәһен ҡушып болғатып, телгә һалырға һәм яйлап ҡына һурырға.

❖ Эрен тығынын һәм миндалина шешеүен тамаҡты йыш сайҡатыу бөтөрә. 4-5 юл япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә, 1-2 балғалаҡ бал өҫтәргә һәм тамаҡты сайҡатырға. Процедураны сәғәт һайын ҡабатларға.

❖ 10 грамм эвкалипт япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 5-10 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр, ашағандан һуң яртышар стакан эсергә.

❖ Тамаҡ сайҡатыу өсөн 1-2 эвкалипт япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға.

❖ 5 һарымһаҡ тешен ныҡ итеп иҙергә, 2-3 ҡалаҡ шалфей үләне өҫтәп, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм 30-40 минут һайын тамаҡты сайҡатырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ **"Башҡорт" "Снайпер"ҙы ергә ҡолатты һәм тос ҡына тондороп, дәғүәсеһен ойпалап алды. Өсөнсө осор башланыу менән атылған уҡтай алға ташланып, Акоп Степанянды аяҡтан йығып, тын быуыу алымын ҡулланды.**



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# КҮК КИЛГӘНДӘ

**Яҙын беренсе күк күкрәүен күк килеү* (ҡайтыу - Ред.) тиҙәр. Күк килгәндә ҡороҡ менән ергә һуғаһың, йүгән алып, шылтырата-шылтырата күккә ҡарап болғайһың-болғайһың да, ергә һуғаһың.**

Шулай һуға-һуға, өй, тирмә, аласыҡтарҙы урап сығаһың, үҙең шулай тип һамаҡлап йөрөйһөң:

*- Ҡорайт, күгем,*
*Ҡорайт, күгем!*
*Ергә бир, илгә бир,*
*Мал-тыуарға бир,*
*Ҡош-ҡортҡа бир,*
*Бала-сағаға бир,*
*Етем-еһергә бир,*
*Тол ҡатындарға бир,*
*Ҡарт-ҡороға бир,*
*Зәғифтәргә бир,*
*Ауырыуҙарға бир,*
*Артҡанын миңә бир!*

Йәшен йәшнәп күк килгәндә, шулай тип теләк теләй торғайнылар:

*- Афәттәр менән килмәһен,*
*Рәхмәттәр менән килһен!*
*Йәшенләнә - ут була,*
*Ен-шайтандар юҡ була.*
*Ямғыр яуһа - мал була,*
*Емеш-еләк мул була.*
*Яу, яу, ямғырым!*
*Нурлан, нурлан, йөйғорон!**

Йәки:

*Ҡорайт, ҡорайт!*
*Уралдан кил, Уралдан кил!*
*Уралдан килһәң,*
*Һыйыр һөтлө булыр.*
*Ҡорайт! Ҡорайт!*
*Яландан кил!*
*Бейә һөтлө булыр!*

Яҙғыһын беренсе тапҡыр күк күкрәгәндә көтөп йөрөргә кәрәк. Күк килеүен ишетеү менән, ҡайҙа тораһың, шунда ятып тәгәрәргә. Тәгәрәгәндә шулай тиҙәр:

*- Дөбөрҙәп китһен,*
*Имәндәй ныҡ булһын!*
*Билем, билем-билемәс,*
*Сирем-сором, сығып ҡас!*

Күк килгәндә йүгәндең ауыҙлығын шылтыратып, өй эсен бер итеп йөрөргә кәрәк. Шулай тип һамаҡлайҙар:

*- Ерҙән ерән айғыр бир,*
*Күктән күк айғыр бир!*
*Ерҙән ерән айғыр бир!*
*Күктән күк айғыр бир!*
*Ҡорайт! Ҡорайт! Ҡорайт!*

Күк күкрәп, йәшен йәшнәгәндә, зыян килтермәһен өсөн, шулай тип теләк әйткәндәр:

*- Ялт-йолт итте,*
*Ялмап китте,*
*Бында теймәне,*
*Үтеп китте;*
*Ялт ит, йолт ит,*
*Юлың ана бара,*
*Үтеп кит, үтеп кит!*

Был теләкте "Йәшен теле" тип тә йөрөтәләр.

Йәшен атып, ут сыҡһа, уны аҡ (һөт, ҡатыҡ) һибеп кенә һүндерәләр. Үрт сыҡһа, "Ялҡын теле" тип йөрөтөлгән теләк әйтелә:

*- Ялҡын килмә,*
*Ялмайым, тимә.*
*Ялҡынға - һалҡын,*
*Өст, өст, фиү!*

*Күк-күк тәңреһе (Күк килеүе) - күк тәңреһенең яҙ килеүен хәбәр итеүе.
*Йөйғорон - йәйғор.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БЫНДАЙ АЛЫШТАР...

## ир-егеттәрҙе сыныҡтыра

**22 апрелдә Өфө-Арена күп функциялы спорт-концерт комплексында ҡатнаш алыш төрҙәре (ММА) буйынса "45-се Глобаль төнгө алыштар" ("Fight Nights global") тип исемләнгән сағыу тамаша үтте. Ҡатнаш алыш төрҙәре спортсыһы, "Башҡорт" тип ололанған, хәрби самбо буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы исеме алған Венер ҒӘЛИЕВ бокс, таэквондо, әрме ҡул һуғышы буйынса спорт мастеры, тос йөҙрөгө арҡаһында "Снайпер" тигән дан алған Акоп Степанянды рингта тын быуыу ысулы менән еңде!**



*Эдуард Дилмөхәмәтов фотоһы.*

Федор Емельяненко менән хеҙмәттәшлек итеүсе "Fight Nights global" промоутерҙары Өфөгә тәүге тапҡыр килде. Улар был проектты башҡорт продюссеры Заһир Ҡотлосурин менән берлектә тормошҡа ашырҙы. "Салауат Юлаев" хоккей командаһының боҙ һарайы ул көндө хәрби самбо, панкратион, ММА көйәрмәндәре менән шығырым тулы ине. Алыш ҡыҙыу булды: бер нисә спортсы нокаут алды, кемдеңдер тынын быуҙылар, кемдеңдер ҡулын шаҡарҙылар. ММА ҡағиҙәләре буйынса, 5-әр минутлыҡ 3 раундта көрәшселәр бер-береһенә йоҙроҡ, аяҡ, тубыҡ, терһәк менән ташланды. Рус телендәге "ятҡан кешегә һуҡмайҙар" тигән әйтемде инҡар итеп, үҙенә ҡаршы сыҡҡан егеттәрҙе ергә атып бәреп, һыу эскеһеҙ үк итмәһәләр ҙә, тетмәһен теттеләр. Ҡыҫҡаһы, Өфөлә шундай аяуһыҙ спорт төрө буйынса турнир үтте. Турнирҙы Өфө тамашасыһы нисек ҡабул иттеме? Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

Ғәлиев - Степанян, Яманбаев - Балкизов, Алиев - Хорхе алыштарын Рәсәйҙең үҙәк спорт телеканалдарында тура эфирҙа күрһәттеләр. Роберт Юлдашев һәм уның "Курайсы"ларының музыкаль оҙатыуында тамашасы алдына башҡорт милли кейемендә сығып баҫҡан Венер Ғәлиевтың шулай уҡ милли кейемдәге көйәрмәндәре лә операторҙарҙың иғтибар үҙәгенә эләкте. Тағы бер ҡыҙыҡлы хәл тураһында әйтергә кәрәктер. Рәсәй спортсыһы Шарамазан Чупанов дәғүәсеһе - Өфө егете Илгиз Сәғәҙиевты еңгәндән һуң: "Был тиклем күп башҡорттарҙы тәүгә күреүем. Ихласлығығыҙ өсөн рәхмәт", - тип, өфөләрҙе сәләмләне. Эйе, Өфө халҡы батырҙарҙы ихтирам итеүен тулыһынса раҫланы. Венер Ғәлиевты "Башкир! Башкир!", "Башҡорт! Башҡорт!", "Венер ағай, әйҙә, әйҙә!" тип дәртләндерһә, башҡаларға ла тауышын, алҡыштарын йәлләмәне. Төп осрашыу тамамланыу менән Өфөләге әрмәндәр йәмғиәте етәксеһенең, рингҡа күтәрелеп, батырҙарға: "Миңә Башҡортостаныбыҙ көрәшсеһе Венер ҙа, тыуған илебеҙ Әрмәнстан спортсыһы Акоп та берҙәй ҡәҙерле. Рәхмәт һеҙгә, Венер һәм Акоп!" - тиеүен дә ихлас алҡышланылар.

Роберт Юлдашев һәм уның "Курайсы"лары, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө, Заһир Зәйнетдинов (ҡумыҙ), Рәсәй эстрадаһы йондоҙо Джиган (вокал) һәм башҡа сәхнә оҫталары тарафынан музыкаль яҡтан биҙәлгән тамашала бөтәһе 12 алыш уҙҙы, йәғни, профессиональ рингта 24 спортсы көс һынашты. Исемдәре билдәле Рәсәй һәм сит ил көрәшселәре менән берлектә, профессиональ алышҡа тәү аяҡ баҫыусы йәштәр ҙә рингҡа күтәрелде. "Глобаль төнгө алыштар" компанияһы гран-приһының сирекфиналында алышыусы яҡташыбыҙ, Венер Ғәлиевтың уҡыусыһы ҡатнаш алыш төрҙәре һәм бокс буйынса донъя чемпионы Руслан Яманбаев та панкратион буйынса ике тапҡыр Рәсәй чемпионы, ошо төр буйынса донъя чемпионаты призеры Ҡабарҙы-Балҡар республикаһы егете Әхмәт Балкизов менән батырҙарса алышты, ләкин дәғүәсеһе отҡорораҡ булып сыҡты.

Хәтерегеҙҙәлер, ойоштороусылар вәғәҙәләгәнсә, Венер Ғәлиев 73 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында әрмән көрәшсеһе Давид Хачатрян менән алышырға тейеш ине. Әммә әрмән егете ошо осрашыуға бер нисә көн ҡалғас, күнекмә ваҡытында йәрәхәтләнеүе арҡаһында, рингҡа сыға алманы һәм промоутерҙар икенсе әрмән көрәшсеһе Акоп Степанянға тәҡдим яһаны. Степанян да башҡорт батырына арыу ғына ҡаршылыҡ күрһәтте. Ләкин Стәрлетамаҡ егете Венер Ғәлиев унан өҫтөнөрәк булып сыҡты - тәүге ике осорҙа аяғүрә алышта әрмән егете үҙенең тәҙ, тос йөҙрөгө менән өҫтөнлөк алһа, икенсе осор уртаһында хәлдәр ҡырҡа үҙгәреш алды. Тәүҙән үк әүҙем һөжүм иткән, әммә әллә ни уңышҡа өлгәшә алмаған "Башҡорт" "Снайпер"ҙы ергә ҡолатты һәм тос ҡына тондороп, дәғүәсеһен ойпалап алды. Өсөнсө осор башланыу менән атылған уҡтай алға ташланып, Акоп Степанянды аяҡтан йығып, тын быуыу алымын ҡулланды.

Беҙ иһә, һөнәребеҙ ҡушҡанса, зыялы ағайҙарҙың һәм апайҙарҙың, фекерле йәштәрҙең уй-тәьҫораттарын көнделек дәфтәребеҙгә теркәй йөрөнөк.

***Хәбир Сәләймәнов, боксер, WBO, NABO версияһы чемпионы, кикбоксинг буйынса донъя чемпионы:*** Миңә был ярыш ныҡ оҡшаны. Венер Ғәлиев - афарин! Уға ҡарап, халҡыма ихтирамым, башҡорт булыуым өсөн ғорурлығым артты. Минең кисерештәр бөгөнгө тамашаны ҡараған, Венерҙың еңеүе өсөн ҡыуанған һәр башҡортҡа хастыр, тип уйлайым. Кисә Fight nights global командаһы егеттәре - Камил Гаджиев, Бату Хасиков һәм Сангаджи Тарбаевтар менән осрашып, эшлекле бәйләнештәр булдырҙыҡ. Әлеге алыштарға килгәндә, Руслан Яманбаев бик шәп көрәшсе, тик ул бер аҙ ҡабаланып, эште харап итте. Икенсе яҡтан, уға саманан тыш көслө дәғүәсе биргәндәр. Профессиональ рингҡа сыҡҡан йәш егетте улай ҙур һынау алдына ҡуймай торорға кәрәк ине ул. Шундай әтнәкә бар ул профессиональ спортта. Һүҙемдең аҙағында һөйөнөслө яңылыҡ менән бүлешәйем - ике аҙнанан Өфөлә үҙемдең спорт залым асылаҫаҡ. Мәле еткәс, был хаҡта ентеклерәк мәғлүмәт еткерермен.

***Рөстәм Байрамғолов, Федераль миграция хеҙмәте хеҙмәткәре***: ММА тигән спорт төрө миңә яҡшы таныш. Мәктәптән һуң алты йыл Төньяҡ Кавказда эшләгән сағымда урындағы егеттәр менән спортзалда ҡул һуғышы, бокс менән шөғөлләнгәйнем. Шуға күрә, бөгөн партерҙа, йәғни иҙәндә ниндәй алымдар ҡулланылыуын аңлау ауырлыҡ тыуҙырманы. Уларҙың ҡайһыларын үҙем дә файҙалана беләм. Әлбиттә, был белемде тормошта ҡулланырға тура килгәне юҡ. Киләсәктә лә ҡулланырға тура килмәҫ, тип ышанам. Әйткәндәй, бөгөнгө нокауттарҙы күргәс, ирекһеҙҙән, ауыл клубтарында булғылаған ҡайһы бер күңелһеҙ хәлдәр хәтергә төштө әле. Ауыл егеттәре лә бындағыларҙан бер ҙә ҡалышмай һуғыша белә икән, тип көлөп ҡуйҙыҡ...

***Регина Агилова: "Гүзәл-данс" студияһы бейеүсеһе, Өфө ҡалаһы:*** Бер яҡтан, ғүмерлеккә хәтерҙә ҡалырлыҡ шәп тантана, йыр-моң, батырҙар сығышы әсир итһә, башҡорт батырҙары ғорурландырһа, икенсе яҡтан, ҡайһы бер спортсыларҙың нокауттан йығылыуы, ҡанлы йәрәхәттәр алыуы йөрәкте "өркөттө". Әммә килеүемә шатмын. Бындай тамашалар кәрәкме? Нисек кенә ҡурҡыныс булмаһын, кәрәктер, тип уйлайым. Сөнки улар барыбер белгестәр тарафынан әҙерләнә, спортсыларҙың ғүмеренә хәүеф тыуҙырмай. Икенсе яҡтан, бындай тамашалар өлгөһөндә ир-егеттәр сынығa. Еңеүҙе лә, еңелеүҙе лә лайыҡлы кисерә белергә өйрәтә. Күрҙек бит: дәғүәсеһенең күсәктәй йоҙроғо берәмләп түгел, "биҙрәләп" яуғанда ла, егеттәр алға һәм алға бара. Тәүәккәллек, маҡсатҡа ынтылыш һәм сыҙамлыҡ өлгөһө был. Ә башҡорт батырҙары - Венер Ғәлиев менән Руслан Яманбаевҡа артабан да башҡорт егеттәрен үҙ өлгөһөндә тәрбиәләүҙәрен дауам итһендәр, тигән теләгебеҙҙе еткергем килә.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

✓ *Был популяр фильмдан һуң "Әсә тураһында хикәйәт" ("Сказ о матери") фильмын төшөрә Әсҡәт Тажетдин улы һәм 1968 йылда Ҡаҙағстан ССР-ы Дәүләт премияһына лайыҡ була. Фильм һуғышта яҡындарын юғалтҡан әсә тураһында.*



ХӘТЕРКИТАП

**Башҡортостан Республикаһы Милли музейының филиалы - Әхмәтзәки Вәлиди музейы Ишембай районы Көҙән ауылында 1994 йылдың 4 октябрендә асылғайны. Музей экспозицияһында башҡорт халҡының данлыҡлы улы - шәрҡиәтсе, философия фәндәре докторы Әхмәтзәки Вәлидиҙең профессор мантияһы, яҙыу кәрәк-ярағтары, документтары, фотографиялары һ.б бик күп экспонаттар тупланған.**

# ВӘЛИДИ МУЗЕЙЫНДА...

## кинооператор Әсҡәт Әшрәпов тураһында ла хәтирәләр һаҡлана





Музей хеҙмәткәрҙәре Әхмәтзәки Әхмәтшаһ улы тураһында яңынан-яңы материалдар туплап, экспозицияларҙы байытыуҙан тыш, республика, район, ауылдың мәҙәни тормошонда ла әүҙем ҡатнашалар. Былтыр Әҙәбиәт йылында беҙ музейҙа ауылдашыбыҙ, яҙыусы, әҙәбиәт ғилеме белгесе, ғалим, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, күп томлыҡ Башҡорт халыҡ ижады йыйынтығын төҙөүсе, мөхәррирләүсе һәм Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Нур Зарипов (Нурмөхәмәт Талип улы Зарипов) тураһында ла күп мәғлүмәт тупланыҡ.

Быйылғы Рәсәй киноһы йылы ла беҙҙең өсөн фәнни-тикшеренеү, яңы күргәҙмәләр ойоштороу эшенә этәргес булды. Әле үҙебеҙҙең музей архивындағы совет кино сәнғәтенә ҙур өлөш индергән Әсҡәт Тажетдин улы Әшрәпов тураһындағы документтар менән эшләйбеҙ. Беҙҙең архивта фотолар, яҡташыбыҙҙың үҙ ҡулы менән яҙған хаты, гәзит материалдары, туғандарының хәтирәләре бар. Әсҡәт Тажетдин улы Әшрәпов 1931 йылдың 15 апрелендә элекке Маҡар районы Ҡыҙыл Октябрь ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ауыр һуғыш йылдарында Көҙән ете йыллыҡ мәктәбендә уҡый һәм 1947 йылда мәктәпте "5"-ле билдәләренә генә тамамлай.

Бына Әсҡәт Тажетдин улының 1972 йылда ауылдаштарына яҙған хатынан өҙөк: "Ауыр һуғыш йылдарында ла, барлыҡ ҡыйынлыҡтарға ҡарамай, яҡшы уҡырға тырыштыҡ. Беҙ 7-се класты тамамлағанда "4" билдәһе аҙ булды. Мин һеҙгә уның сәбәбен, серен асып ебәрәйем. Төрлө ауылдарҙа (Көҙән, Октябрь, Ғүмәр) торһаҡ та, беҙ экзамендар алдынан бергә йыйналып, бергәләп әҙерләнә торғайныҡ. Йыйналыр алдынан һәр беребеҙ бер теманы әҙерләп, иптәштәргә һөйләй инек. Һөйләгән уҡыусы-уҡытыусы аҙаҡ тыңлаусыларға һорауҙар биреп, уларҙың ни дәрәжәлә теманы үҙләштереүен белешә торғайны. Былай әҙерләнеү беҙгә уҡыу материалын яҡшы үҙләштереүгә ярҙам итә торғайны. Беҙҙең күбебеҙ экзаменға ингәс, әҙерләнмәй генә яуап бирә ала торғайны. Шулай әҙерләнеүҙе иптәштәр, шаярып, "Әсҡәт системаһы" тип атанылар. Әгәр һеҙгә оҡшаһа, һеҙ ҙә ошолай әҙерләнеп ҡарағыҙ.

Ул ваҡытта мәктәптә комсомол ойошмаһы ойошторолғайны, мин уның беренсе секретаре булдым. Комсомолецтар, яҡшы уҡыу менән бергә, колхозға ла ҡулдарынан килгәнсе ярҙам итте..."

Әсҡәт Әшрәпов 1947 йылда Көҙән мәктәбендә 7-се синыфты тамамлағас, Өфө ҡалаһында хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатында уҡыуын дауам итә. Бында ла ул иң әүҙем уҡыусылар иҫәбендә була: туристик походтарҙа, Башҡорт кавалерия дивизияһы юлы буйлап ойошторолған экспедицияла ҡатнаша, кинофото түңәрәктәрҙә шөғөлләнә. Ошо урында бер ҡыҙыҡлы фактты иҫкә төшөрөү урынлы булыр. 1939 йылда Степан Злобиндың "Салауат Юлаев" романы менән танышҡас, режиссер Яков Протазанов батыр тураһында кино төшөрөргә була. Эш "Союздетфильм" киностудяһында башлана. Ә йәй көнө Көҙән ауылында халыҡты йыйып, сход үткәрәләр һәм беҙҙең яҡта кино төшөрәсәктәрен хәбәр итәләр. Аты булған ир-егеттәрҙе күмәк сәхнәләрҙә ҡатнашырға саҡыралар. Ҡатнашыусылар араһында Әсҡәттең атаһы Тажетдин Заһретдин улы ла була. Был фактты Әсҡәт тә белә һәм гел генә ғорурланып һөйләй торған була.

1950 йылда мәктәпте тамамлағас, Әсҡәт Әшрәпов Мәскәүҙәге Кинематография институтына (ВГИК) уҡырға инә. Беренсе курсты тамамлап, Башҡортостанға ҡайтҡанда Әҙәбиәт институты студенты Рәми Ғарипов менән Фәндәр академияһы ҡушыуы буйынса Башҡортостанда фольклор һәм этнография буйынса материалдар йыйыуҙа ҡатнаша. Буласаҡ кинооператор тәбиғәттең, унда йәшәгән кешеләрҙең матурлығын күрә белергә өйрәнә шулай.

1955 йылда диплом эшен "бишле"гә яҡлай. Ул "На Оке" тип аталған киноочерк була. Диплом етәксеһе профессор Гальперин класында үҙе бер сенсация була был эш.

Кинематография институтын тамамлағас, үҙаллы ижад юлын Алматыла башлай. Тәүҙә ул бында икенсе кинооператор булып эшләй һәм күберәк документаль фильмдар төшөрә. 4 йыл эшләп, үҙен күрһәткәс, режиссер Солтан Ходжиков уны тулы метражлы нәфис фильм төшөрөргә саҡыра. "Если бы каждый из нас" тип атала ул фильм. Был талантлы режиссер менән эшләү бик ҡыҙыҡ була. Сөнки улар бер-береһен ярты һүҙҙән аңлауға өлгәшәләр.

Был популяр фильмдан һуң "Әсә тураһында хикәйәт" ("Сказ о матери") фильмын төшөрә Әсҡәт Тажетдин улы һәм 1968 йылда Ҡаҙағстан ССР-ы Дәүләт премияһына лайыҡ була. Фильм һуғышта яҡындарын юғалтҡан әсә тураһында. Ә Әсҡәт өсөн был тема бик яҡын: уның балалыҡ йылдары ла һуғыш йылдарында үтә бит һәм ул саҡта күргәндәр - улдарын, ирҙәрен, туғандарын юғалтҡан ҡатындарҙың илауҙары, аслыҡтан үлмәҫ өсөн туң ерҙән картуф сүпләүсе бәләкәс ҡыҙҙың ҡулдары мәңгелеккә уның хәтеренә уйылған... Фильмдың төп героиняһы Әминә лә уға үҙ әсәһен хәтерләтә: Көҙән ауылынан һуғышҡа китеп һәләк булыусылар араһында уның атаһы ла була бит. Кеше үҙен тулҡынландырмаған эшкә тотонорға тейеш түгел - был Әсҡәт Тажетдин улының ижади инаныуы була һәм фильм ошоно раҫлай ҙа инде.

Унан һуң Солтан Ходжиков менән тағы ла фильмдар төшөрөлә: "Артта - Мәскәү" ("За нами Москва"), "Атамандың һәләкәте" ("Конец атамана"), "Ҡыҙебәк" ("Кыз-Жибек") һ.б. Был фильмдар өсөн Әшрәпов Әсҡәт Тажетдин улы Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Был "Эҙҙәр офоҡ артына китә" ("Следы уходят за горизонт") эше өсөн Ә.Т. Әшрәпов Урта Азия һәм Ҡаҙағстан республикалары кинофестивалендә диплом ала. Шулай итеп, Әсҡәт Тажетдин улы тарафынан 17 тулы метражлы нәфис фильм, 15 документаль фильм төшөрөлә. Уның фильмдары Бөтә Союз һәм Халыҡ-ара кинофестивалдәрҙә күрһәтелә, төрлө призларға лайыҡ була. Ул 1990 йылда Башҡортостан киностудияһын төҙөүгә лә үҙ өлөшөн индерә.

Әсҡәт Әшрәповтың тормош иптәше Лола Абдукаримова - киноактриса. Балалары ла ижад кешеләре. Улы Тимур Әшрәпов танылған клипмейкер. Ғүмеренең һуңғы йылдарында Әсҡәт ағай Ҡырымда йәшәй һәм 2008 йылда вафат була. Балалары бындағы туғандары менән аралашып йәшәй. Әшрәповтарҙың йәш быуыны атай нигеҙен ҡоротмай. Бер туған апаһы Хөббөниса апайҙың улдары Әсләм менән Әҙһәм Көҙән һәм Ҡыҙыл Октябрь ауылдарында йәшәй. Беҙ, музей хеҙмәткәрҙәре, Әсҡәт Тажетдин улының бер туған ағаһының ҡыҙы - Ишембайҙа йәшәүсе уҡытыусы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы Мөнирә Мөхәммәт ҡыҙына, ғаилә архивындағы мәғлүмәттәре менән бүлешкәне өсөн рәхмәт белдерәбеҙ.

**Сәүиә ВӘЛИЕВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Туғыҙынсы числола шулай уҡ урмандар буйлап 50 саҡрымда булған Келәнсе старшина тирмәләренә тиклем юлыбыҙҙы дауам иттек. Ошо юлыбыҙҙа егерме саҡрым ерҙә Яман Йылғаға (автор яҙғанса, худая речка - Еман Жилга. - **Ред. иҫк.**) ҡойоусы Яйыҡбай (богатая речка) йылғасығы башынан һәм Яйыҡбайҙан 10 саҡрымда ятҡан Ҡайҡабара йылғасығы үренән уҙҙыҡ. Уның ағымы оҙондан түгел. Ул Яман Йылғаға ҡоя, беҙ уны Келәнсе старшина күсенә килеп еткәнсе өс тапҡыр кисеп сыҡтыҡ; уның тирмәләре Яман Йылға баштарының береһе янында урынлашҡан: йылғасыҡтың унға яҡын сығанағы бар, улар бер ағым яһап ҡушылғас, һыуҙарын Ағиҙел йылғаһына ҡойоусы Үҙән йылғаһына илтә.

Унынсы числола беҙҙең юлыбыҙ тәүге көндәргә ҡарағанда күпкә ауырыраҡ булды. Ағиҙел йылғаһына яҡыная барған һайын, тауҙар бейегәйә барҙы. Төшкә табан беҙ ярайһы уҡ ҙур һәм шәп ағымлы Ҡағы йылғаһына килеп еттек: әммә уны бар ерҙә лә тип әйтерлек кисеп сығып була ине. Ике яҡтан да бейек кенә тауҙар булып, уларҙың араһында мул туғайлыҡтар ята. Бөтә тауҙар ҙа ҡуйы ҡыҙыл урман менән ҡапланған, унда ҡарағас бигерәк тә күп ине. Тауҙарҙа урман нисек бай булһа, унда үҫкән үләндәр ҙә шулай уҡ гүзәл булып, йыйғандарыбыҙҙың иң яҡшыһы ошо тауҙарҙан алынды.

Уҙған йәй был илдә булған ҡоролоҡ тау башҡорттарына ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырған, улар, ҡарама ағасы аҙ булғанлыҡтан, малдарына ҡарағай ҡабығы ашатып, урманға байтаҡ зыян килтергән, малдарының да күп өлөшө ошо аҙыҡтан үлеп бөткән...

Белорет заводынан 15 саҡрымда башҡорттарҙың иң бай старшинаһы Байым Тархан тирмә ҡорған ине. Башҡа башҡорттар менән сағыштырғанда ниндәй ҙә булһа айырмаһы булыу-булмауын асыҡлау ниәте менән беҙ уны барып күрергә теләгәйнек, әммә башҡорт ҡайҙа ла башҡорт инде: бөтөн айырма уның бик ҙур йылҡы көтөүҙәре булыуы арҡаһында башҡа башҡорттарға ҡарағанда ҡымыҙ менән нығыраҡ һыйлана алыуынан ғибәрәт ине.

Белорет заводынан 50 саҡрымдарҙа Яман Тау (злая, худая гора) исемле тау бар, беҙ уны шулай уҡ барып күрҙек. Был тау Нуғай юлына ҡарай, иң бейек тау һырттарынан һанала, башы һәр саҡта ла ҡар менән ҡапланғанлыҡтан, башҡорттар тарафынан яман тип аталған. Ошо тауҙың бейек түбәһен һаҙлыҡ һәм ҙур күләүектәр тәшкил итә. Унан бәләкәйҙәрҙән булмаған биш Урал йылғаһы ағып сыға. Көнбайышҡа табан ағыусы Йүрүҙән һуңынан төшкөлөккә ауышып, Өфө йылғаһы менән тоташа. Елдәк ҡәлғәһенән 30 саҡрым өҫтәрәк, көнбайыш һәм төшкөлөк араһында ике - ҙур һәм кесе Йүрүҙән йылғалары бар (автор Үҙән исемле йылғаларҙы ла Йүрүҙән тип атай. - **Ред. иҫк.**), улар бергә ҡушылғандан һуң көнсығышҡа борола һәм Табынскиҙан 40 саҡрымдар тирәһендә Табынск менән Өфө араһында Ағиҙелгә ҡойоусы Эҫем йылғаһына үҙенең һыуҙарын ҡоя.

**(Дауамы бар).**

✓ *Бөгөн бына боҙолоп ултыр оло юлда, һиңә берәү ҙә туҡтамаясаҡ. Ултыр Бөрйән юлында, туҡтамай үтеп киткән транспорт булмаясаҡ. Үҙҙәренә ауырлыҡ килтереп булһа ла ярҙам итәсәктәр улар һиңә.*



# ИЛ АҒАҺЫ БУЛЫУ

## һаҡал кәрәкмәй,

**Ил ағаһы булыу өсөн һаҡал кәрәкмәй - аҡыл кәрәк, ти халыҡ. Был һүҙҙәр юҡтан тыумаған. Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртҡан Салауат Юлаев, Алдар батыр, Зәки Вәлиди кеүек шәхестәребеҙгә ил алдында һүҙ тотҡанда, мәңгелек әҫәрҙәр ижад иткәндә, сәйәси мәсьәләләрҙә хәл иткәндә нисә йәш булған икән тиһегеҙ? Егеменән - утыҙ биш йәшкәсәләр барыһы ла. Тимәк, эш йәштә түгел, ә йөрәктә. Бөрйән район хакимиәте башлығы Рөстәм Динислам улы ШӘРИПОВтың эшмәкәрлеге менән танышҡанда ла иң башта уның йәш кеше булыуына иғтибар иттек. Һәм, әлбиттә, "Һеҙгә нисә йәш ул?" тигән һорауҙан ҡасып булманы. "33", тип яуаплай хакимиәт башлығы, бөрйәндәрсә күҙҙәрен генә көлдөрөп.**

▸ **Рөстәм Динислам улы, Бөрйән районының республиканың айырым бер биләмәһе икәнлеге билдәле. Был райондың етәксеһе булараҡ, Һеҙ уның бөгөнгө тормошон, көнкүрешен нисек баһалайһығыҙ?**

- Бөрйәндең географик урыны, иҡтисади, социаль, тарихи һәм башҡа торошон күҙ уңында тотоп, мин уның хәлен башҡа районлар менән сағыштырыу, бәлки, урынһыҙҙыр ҙа тип уйлайым. Үҙегеҙ билдәләп үттегеҙ - был район айырым биләмә. Электән килгән "төпкөл" тигән атамаһында быға йәшәй. Насар мәғәнәлә түгел, ә ҡалаларҙан, үҙәктәрҙән алыҫ булғанға. Һәм был үҙенә күрә кире һөҙөмтәләрен дә бирмәй ҡалмай. Шундай күренештәрҙең иң беренсе сираттағыһы - эшһеҙлек. Йәшерен-батырыны юҡ, бөгөн Бөрйән районы эшһеҙлек буйынса беренсе урында тора. Мәктәп, дауахана кеүек бюджет өлкәһенән тыш, халыҡҡа сығып эшләрлек производстволар юҡ. Ярай, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ яҡшы ғына үҫеш ала, уларға, әлбиттә, өмөт бар. Шулай уҡ халыҡтың боронғоса үҙ хужалығына таянып йәшәргә ынтылышы ла күҙәтелә. Күпләп мал, умарта, ҡош-ҡорт аҫырауҫылар һәм шул иҫәптән ғаиләләрен ҡарап, балаларын уҡытыусылар күп.

Әлбиттә, райондың тормошон бынан ун-ун биш йыл элекке менән сағыштырып ҡарағанда, ер менән күк айырмаһы. Алға китеште, ыңғай хәл ителгән күренештәрҙе күҙгә элмәү мөмкин түгел. Әммә шул уҡ ваҡытта үҙәккә, баш ҡалаға яҡын ятҡан районлар, ҡалалар йәшәйеше менән ярышыу урынһыҙ. Бәлки, иҡтисади мәсьәләләрҙә Бөрйән иң аҙаҡҡы райондарҙың береһелер. Тик был әле халыҡтың социаль торошон көйҙәләндермәй. Мин, мәҫәлән, үҙем ошо район кешеһе булараҡ, районымдың бөгөнгө йәшәйеше, уның ҡаҙаныштары, халҡы һәм тәбиғәте менән ғорурланам. Бында, ҡаты тәбиғәт шарттарында йәшәүсе кешеләр араһында, нисек кенә булғанда ла, ниндәй генә хәлдә лә, иң беренсе урынға кешелеклелек сифаты ҡуйылған.

▸ **Башҡорт халҡының айырым менталитеты булыуы хаҡында беләбеҙ. Ә бөрйәндәрҙең айырым холоҡ һыҙаттары бармы ул? Нисегерәк итеп ҡылыҡһырлайһығыҙ ерле халыҡты?**

- Теге йәки был ерлеккә урынлашҡан халыҡтың холоҡ-һыҙаттары уның йәшәгән, урынлашҡан еренең географияһынан башлап, эсәр һыуына хәтле бәйле икәнлеген бөгөн иҫбатлап торорға кәрәкмәй. Ниндәйҙер айырмалыҡтар хатта бер биләмәләге ауылдар араһында ла була. Ә инде бөрйәндәргә килгәндә, башҡорт менталитетын ҡылыҡһырлаған "ябай, тәбиғәткә яҡын, уйсан, фәлсәфәүи аңлы, бер аҙ моңһоҙораҡ, әммә бик ғорур" тигән төшөнсәләр бөтәһе лә беҙҙеке. Тап беҙҙеке. Сөнки был холоҡ инде күп яҡ башҡорттарында ҡалмаған. Уларҙы заман нығлы эшкәрткән һәм улар күпкә ҡатыраҡ, үткерерәк, ҡулайлаша белгәнерәк булып киткән. Ә беҙҙекеләр тау-урмандар һиллеген, тәбиғәт менән берлелекте, тәбиғи фәлсәфәүи фекерләй белеүҙе һаҡлай әле. Нимә генә тигәндә лә, бында халыҡ ябай, хатта үтә ябай. Улар баҙар иҡтисадын да яңы ҡабул итә башланы. Бөрйән кешеһе өсөн баҙарҙа һатыулашып тороу, юлда ярҙам иткән өсөн хаҡ һорау, юл кешеһен алдау-талау, күрше-тирәһе менән ғауғалашыу, сит кешене ҡыйырһытыу ситен. Бөгөн бына боҙолоп ултыр оло юлда, һиңә берәү ҙә туҡтамаясаҡ. Ултыр Бөрйән юлында, туҡтамай үтеп киткән транспорт булмаясаҡ. Үҙҙәренә ауырлыҡ килтереп булһа ла ярҙам итәсәктәр улар һиңә. Бөрйән кешеһе ул ҡулындағыһын тоттороп ебәрһә ебәрә, тартып алмай. Үҙендә булмаһа ла һорамай, теләнселәмәй ҙә, талап та итмәй. Ул үҙ донъяһында - баҫалҡы һәм ғорур. Ситтәр өсөн бер аҙ ҡатыраҡ тәбиғәтле, йомоғораҡ булып күренәбеҙ, был ҡырыҫ тартыныуҙы йәшерә, һаҡланыу сараһы ғына, ә, асылда, бөрйәндәр улар үтә алсаҡ, ябай, саф халыҡ.

▸ **Ана шул ябайлыҡ, сафлыҡ бөгөн бөрйәндәрҙең бәкәленә һуҡмаймы икән? Күп ауылдар башлыса газ, һыу кеүек уңайлыҡтарҙың ни икәнен дә белмәй, рәтле юлдар күрмәй, күп нәмәнән мәхрүм булып көн итәләр кеүек түгелме?**



*Федераль ҡурсаулыҡтар беҙҙә ҡайҙа бесән сабырға, ҡайҙа утын әҙерләргә, ҡайҙа ял итергә икәнлеккә тиклем сикләй. Йорт һалыу өсөн ер бүлеү һорауҙары ла, шул сәбәпле, бик ҡыҫҡан тора. Хатта ҡайһы ваҡыт бөтөн Бөрйән районын ҡурсаулыҡ итергә лә, урындағы халыҡҡа ниндәйҙер финанс ярҙамы булдырырға, тигән фекерҙәр ҙә тыуа. Ләкин мин, мәҫәлән, райондың хакимиәт башлығы булараҡ та, ябай Бөрйән кешеһе булараҡ та, был тәҡдимгә ҡаршымын. Әлбиттә, аҫаба ерҙәргә хужа була алмауға, ерҙәр менән иркен идара итә алмауға йән әсей. Шул уҡ ағас бүлеү мәсьәләһендә лә ауырлыҡтар етерлек. Күптәр хакимиәт ағасты нисек теләй, шулай бүлеп, кемгә теләй, шуға бирә ала, тип уйлай. Тик был төптө улай түгел.*

- Дөйөм алғанда был шулай, эйе. Тик был яҡта ана шул етешлек, бөтөнлөк, камиллыҡ уңайлыҡтар йәки барлыҡ-юҡлыҡ менән үлсәнмәй. Бында донъяны ҡабул итеү фәлсәфәһе саҡ ҡына башҡасараҡ. Беҙҙә кешеләр газһыҙ-һыуһыҙ йәки юлһыҙ ҙа бәхетле була белә. Йыш ҡына Үргә Нөгөш ауылында булырға тура килә. Унда ҡыш көндәре бөтөнләй юл өҙөлә. Уйлап ҡараһаң, шундай уңайһыҙлыҡтан халыҡ асыулы торорға тейеш кеүек тә, ә уларҙа кире тойғоларҙың әҫәре лә юҡ. Юҡ, улар күнгән йәки башҡа тормошто белмәй түгел. Улар тәбиғәткә үтә лә ереккән һәм уның менән бербөтөнлөктәрен тәбиғи ҡабул итә белә.

Бөтә нәмә лә сағыштырыуҙа асыҡлана, тиҙәр. Һеҙ әле мегаполис тормошо менән урман кешеһененең йәшәйешен сағыштырырға маташаһығыҙ. Ләкин улар тиңләшә йәки тиңләшмәй торған аңлатмалар түгел. Улар икеһе ике донъя. Ғүмерҙә ҡаланы күрмәгән һәм бер ваҡытта ла күрмәйәсәк кешеләр бар бында, хатта район үҙәгенә лә өс-дүрт йылға бер генә сығып әйләнгәндәр етерлек. Мөмкинлектәре сикләнгәндән түгел, ә ихтыяждары булмағанға. Улар үҙҙәренең шул тыныс, һил, мөһабәт зоналарын комфортлы тип таба, башҡа тормош эҙләмәй.

Төптән аңлатҡанда, әлегеләй фәлсәфәгә төшөп китергә тура килә. Тәбиғәт менән кеше араһындағы гармонияға, идиллияға нигеҙләнә был фәлсәфә. Әйтәләр ҙә инде, бәхетле була торған урынды эҙләмә, йәшәгән ереңдә бәхетле була бел, тип. Бына беҙ шуны беләбеҙ.

▸ **Район республикала эшһеҙлек буйынса беренсе урында торорға ла мөмкин, тигән һүҙ ҙә булды. Халыҡ араһында ошо эшһеҙлек ни хәтле кимәлдә тойола? Ыҙалаймы кешеләр бынан, әллә артыҡ ҡайғырмаймы? Һәм был кире күренеште хәл итеү, ыңғайға көйләү юлдары бармы икән?**

- Кешене кешелектән сығарыу өсөн иң башта уның ҡулынан хеҙмәтте тартып ал, тигән фекер йәшәй. Тик хөкүмәттең эш менән тәьмин итмәүе әле эшһеҙ булыу тигәнде аңлатмай бит. Мөмкинлектәрҙе эҙләйбеҙ. Бар, әлбиттә, шәхси эшҡыуарлыҡҡа тотонған, уңышлы ғына эшләп килгәндәр бар. Үрҙә әйтеүемсә, баҙар иҡтисадында йәшәп һәм эшләп өйрәнеү беҙҙең яҡтарға яңы-яңы килеп етә, халыҡ әле ул йәшәйешкә ҡулайлашып китә алмай.

Күптән түгел ҡортсолоҡ буйынса кәңәшмә үткәргәйнек. Райондағы солоҡсолоҡ, тап ҡарағай солоҡсолоғо, ошо ерлеккә хас шөғөл. Ошо өлкәне ныҡлап үҫтереү отошло юлдарҙың береһе буласаҡ, тип уйлайбыҙ. Һәм һуңғы йылдарҙа былай ҙа шәхси хужалыҡтарҙа ҡорт тотҡандар һаны күбәйҙе.

Әле бөрйәндәрҙең туристарҙы файҙаланып аҡса эшләргә өйрәнәһе бар. Был улар өсөн яңы асылып торған өлкә. Сувенирҙар эшләү, аҙыҡ-түлек, дөйөм туҡланыу нөктәләре булдырыу, торлаҡ тәҡдим итеү, иҫтәлекле урындар буйлап экскурсиялар ойоштороу, һыу юлдары буйлап йөрөтөү ҙә килем алыу юлдары ул.

Беҙҙә завод-фабрикалар йәки цехтар юҡ. Леспромхоз эшләп килде, әммә ул бөгөн юҡ кимәлендә. 100-120 кешегә булһа ла эш урыны бирә ине ҡасандыр. Әле ошо юҫыҡты киренән терелтеүҙең төрлө варианттарын ҡарайбыҙ - нисек килеп сығыр.

Белеүегеҙсә, беҙҙең территорияның 42 процентын Федераль ҡурсаулыҡтар биләй. Рәсәй буйынса бер түгел, ике ҡурсаулыҡты үҙенә индергән бер генә район да юҡ. Был, бер яҡтан, беҙҙең мөмкинлектәрҙе сикләһә, икенсе яҡтан, тәбиғи ресурстарҙы ҡулланып йәшәй белергә өйрәнеү мәле киләсәк әле, тигән өмөттә лә йәшәтә. Бөгөнгө быуын тәүгә аҙымдарҙы яһаһа, киләһе быуын - йәштәр - оҫтарыр, моғайын.

▸ **Ниндәй кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә Бөрйән?**

- Бөрйәнгә табиптар етешмәй. Беҙ уларға бөтөн йәшәү шарттарын да булдырабыҙ, табиптарға ҡаралған бөтөн республика, федераль программалар үтәлә, килһендәр генә. Шулай уҡ райондың эске эштәр бүлегенә хеҙмәткәрҙәр йәлеп итеү ауыр. Бөгөн унда, мәҫәлән, 30-35 меңлек хеҙмәт хаҡы менән ун биш вакансия буш тора. Төҙөлөш өлкәһе лә белгестәргә мохтаж.

***✓ Туристарҙың зыяны уларҙың мәҙәниәтһеҙлегенән, тәбиғәтте хөрмәт итмәүенән килә. Йыл һайын тигәндәй ҡырағай ял итеүселәрҙең һаҡһыҙлығынан янғындар сыға, гүзәл урындар сүп-сарға күмелә, тау-таштар ҡаҙыла, соҡола.***

**▸ Бөгөн райондағы иң ауыр мәсьәлә - ер, шулай бит?**

- Эйе. Үрҙә әйтелгәнсә, федераль ҡурсаулыҡтар беҙҙе ҡайҙа бесән сабырға, ҡайҙа утын әҙерләргә, ҡайҙа ял итергә икәнлеккә тиклем сикләй. Йорт һалыу өсөн ер бүлеү һорауҙары ла, шул сәбәпле, бик киҫкен тора. Хатта ҡайһы ваҡыт бөтөн Бөрйән районын ҡурсаулыҡ итергә лә, урындағы халыҡҡа ниндәйҙер финанс ярҙамы булдырырға, тигән фекерҙәр ҙә тыуа. Ләкин мин, мәҫәлән, райондың хакимиәт башлығы булараҡ та, ябай Бөрйән кешеһе булараҡ та, был тәҡдимгә ҡаршымын. Әлбиттә, аҫаба ерҙәргә хужа була алмауға, ерҙәр менән иркен идара итә алмауға йән әсей. Шул уҡ ағас бүлеү мәсьәләһендә лә ауырлыҡтар етерлек. Күптәр хакимиәт ағасты нисек теләй, шулай бүлеп, кемгә теләй, шуға бирә ала, тип уйлай. Тик был төптө улай түгел.

# өсөн...

## аҡыл кәрәк

**▸ Бөрйәндә йыл әйләнәһенә тигәндәй туристар йөрөй. Уларҙан һеҙҙең бюджетҡа файҙа бармы? Һәм тәбиғәткә, урындағы халыҡҡа зыяны ла етерлектер?**

- Әгәр ҙә һеҙ Шүлгән мәмерйәһенә ағылған туристарҙан алынған килем тураһында һүҙ алып барһағыҙ, бынан беҙгә бер тин дә күсерелмәй. Сөнки был федераль кимәлдәге мәсьәлә. Бары тик Шүлгән мәмерйәһе биләмәһендә эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙән, НДФЛ иҫәбенән, йылына биш миллион тирәһе файҙа килә. Урындағы етәкселек менән килешеү нигеҙендә, ниндәйҙер кимәлдә спонсор ярҙамына ла өмөт итә алабыҙ.

Туристарҙың зыяны уларҙың мәҙәниәтһеҙлегенән, тәбиғәтте хөрмәт итмәүенән килә. Йыл һайын тигәндәй ҡырағай ял итеүселәрҙең һаҡһыҙлығынан янғындар сыға, гүзәл урындар сүп-сарға күмелә, уйламаған урындар, тау-таштар нимәләрҙер эҙләп ҡаҙыла, соҡола. Шулай уҡ һыу буйындағы ауылдар халҡына ял итеүселәрҙең ялանғас йөрөүе лә оҡшап етмәй, бигерәк тә ололар йыш ҡына ошо хаҡта һүҙ сығара.

Әлбиттә, бөтөн һаҡланыу сараларын ҡарарға тырышабыҙ, урман-һыуҙы таҙалау, сүп һауыттары ҡуйыу, төрлө өндәүсе, саҡырыусы лозунгылар, тәбиғәттә үҙеңде тотоу буйынса инструкциялар һ.б. яңынан-яңы форматтарҙа уйланып, килеүселәргә еткерелеп тора.

**▸ Бөрйән бал ҡорто "Бурзянка"ны ниндәйҙер икенсе сорт ҡорттары менән буталып, юғалыу кимәлендә тора, тигән хәбәрҙәр йөрөй. Шүлгән мәмерйәһе кеүек үк, районды даны булған был ҡорттар бит тик ошо ерлектә генә һаҡлана ала. Дөрөҫләйһегеҙме ошо хәбәрҙе?**

- Юҡ, беҙ был төркөм ҡортон күҙ ҡараһындай һаҡлайбыҙ, таҙа килеш үрсетәбеҙ һәм хатта, киреһенсә, солоҡсолоҡ юҫығында киңәйтеп ятабыҙ.

Әлбиттә, икенсе төркөм ҡорттарының һөжүме лә юҡ түгел. Йәйҙәрен районға фургондар менән сит ҡорттар умарталарын тейәп килеүселәр күбәйә. Уларҙы иһә эҙәрлекләйҙәр, табалар һәм тиҙ арала ҡыуып ебәрәләр. Был тәңгәлдә ветеринар хеҙмәттәребеҙ әүҙем эшләй, хатта махсус программа булдырғанбыҙ.

Халыҡ үҙе лә бик иғтибарлы был тәңгәлдә, бер ваҡыт булып алған белгестәр тәжрибәһенә лә дәррәү ҡаршы сыҡты улар. Хәҙер ауылдарҙа 30-40, хатта унан да күп баш умарта тотҡандар бар. Ошо тәңгәлдә ҡортсолоҡтоң нисек итеп кеше тәбиғәтенә, уның эске донъяһына йоғонто яһауын да күҙәткәнем бар. Был шөғөл кешене тулыһынса ыңғайға, ыңғай эмоцияларға, донъяны ыңғай ҡабул итеүгә, ыңғай ҡараштарға көйләй. Ул шундай юғары тәрбиәүи фәлсәфәгә эйә.

**▸ Һунарсылыҡ ни кимәлдә бөгөн Бөрйәндә? Әле бүреләр ҡурҡыныс янай, тип ишетәбеҙ.**

- Артыҡ үҫешкән йәки файҙалы яҡҡа үҫешкән, тип әйтә алмайым. Урында ике һунарсылыҡ хужалығы бар. Туристар кеүек үк, һунарсыларҙы ла йәлеп итә кейекле урман-тауҙар. Ҙур транспорт менән, ҡыштарын ҡарйөрөгөстәрҙә рөхсәтһеҙ урман гиҙеүселәр ҙә, тыйылған кейектәргә ау ҡороусылар ҙа етерлек.

Һунарсылыҡ өлкәһендә системалы эш алып барылмай, асыҡлыҡ етешмәй. Һунарсылыҡтың бөгөн аҡсалы кешеләр, байҙар өсөн генә уйын булып китеүе эсте бошора, әлбиттә. Был халыҡта ла ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Тик район быларҙың барыһын да контролдә тота алмай.

Элегерәк беҙҙә лә күп кешелә ҡорал бар ине, сығып, марал атып алыу йә ҡоторған этте тәкмәсәтеп ебәреүҙе һәр ир кеше тигәндәй башҡара ала ине. Хәҙер закондар ҡаты, штрафтары ҙур, ҡорал тотоу тәртиптәре лә ҡатмарлы, шунлыҡтан ауылдарҙа ҡорал юҡ тигәндәй. Ә бүреләр хәүефе ысынлап бар. Бына үткән йәйҙәрҙә бер крәҫтиән хужалығында ғына 28 ҡолондо тәләфләне йыртҡыстар. Бүре тырнағы эләккән йәш ҡолон мал була алмай. Һарыҡ-кәзәләр хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Бер йәйҙә, уртаса алғанда, һәр ауылдан 10-15 эре һәм 30-40 ваҡ мал айыу-бүре тешенә эләгеп тора. Был ауыл халҡы, ауыл ғаиләһе өсөн ҙур зыян. Был мәсьәлә буйынса республика кимәлендә эштәр башланды.

**▸ Рөстәм Динислам улы, һеҙ республикала иң йәш хакимиәт башлығы, республика етәкселегенән һеҙҙе йәш кеше тип ташлама менән ҡарау юҡмы, әллә, киреһенсә, күберәк яуаплылыҡ һалырға тырышалармы? Һеҙ үҙегеҙҙе етәкселек вазифаһына алдан әҙерләнегеҙме, әллә был осраҡлы хәлме? Баштан ошо ролегеҙҙе белһәгеҙ, әҙерлек мәлендә күберәк нимәләргә иғтибар итер инегеҙ?**

- Республика етәкселегенән бер ниндәй ҙә айырып ҡарау тоймайым. Һиңә был вазифаны ышанып тапшырғандар, йөрьәт итеп ҡабул иткәнһең икән - эшлә! Әлбиттә, олораҡ етәкселәрҙән, тиҫтәләгән йыллыҡ тәжрибәләре булған хакимиәт башлыҡтарынан кәңәштәр алам, уларҙың ағайҙарса шаяртыуҙарын да ҡабул итәм. Йәштәргә юл ҡуйыла беҙҙә, уларға ышаныс белдерелә, яуаплылыҡ һалына. Ололарҙың аҡыллы булыуы, тип иҫәпләйем быны.

Мин йәштән маҡсат ҡуйып һәм маҡсатҡа яраҡлы эшләргә өйрәндем. Шунлыҡтан минең өсөн нимәлер осраҡлы булырға мөмкиндер, тип уйламайым. Бары тик күберәк иҡтисад өлкәһен күҙ уңында тотоп, тарих, география кеүек фәндәрҙе ситтәрәк ҡалдырғаныма үкенәм. Уларҙы миңә тормош тәжрибәһендә өйрәнергә тура килә.

Хакимиәт башлығы тигән вазифаны мин ниндәйҙер абруй итеп ҡабул итмәйем. Ғәҙәттә, ни булһа ла етәксе ғәйепле, етәксе яуаплы. Маҡталыуға ҡарағанда, әрләнеү, көйөнөүҙәр, тетрәнеүҙәр күберәк. Башта быларҙы бик ауыр кисерһәм, хәҙер бешектем. Яҡшы, ыңғай эштәрҙең дә төрлө ҡараш, ҡаршылыҡтар аша килерен беләм, аңлайым. Мин бит яңғыҙ түгел, янымда - ышаныслы, тәжрибәле, аңлы халыҡ.

**▸ Бөрйән саф башҡорт теле һаҡланған район. Нисек уйлайһығыҙ, бындағы милли рух, тел һаҡлауға һәм яҡлауға мохтажмы бөгөн?**

- Башҡа райондарҙан айырмалы рәүештә, Бөрйәндә бер ауылда ла русса йәки башҡа телдә һөйләшмәйҙәр. Әлбиттә, уҡыу-уҡытыу дөйөм республика программаһы буйынса алып барыла. Бында халыҡ рухын, телен яҡлап айҡашып өйрәнмәгән, уларҙа агрессия юҡ. Сөнки уны ҡыҫырыҡлаған башҡа милләттәр ҙә юҡ иҫәбендә. Беҙҙә бармаҡ менән генә һанарлыҡ булған икенсе милләттәрҙе, йәки ваҡытлыса килгәндәрҙе, ҡунаҡ итеп кенә ҡабул итәләр.

Рух иһә бөрйәндәрҙә тәбиғи, ул тойғоно, хатта тойғо ғына түгел, булмышты уларҙан бер нисек тә тартып алып йәки икенсе итеп булмай. Әлеге ваҡытта рух төшөнсәһен мин тыуған ереңә һөйөү, тоғролоҡ, милләтеңде, ерһыуыңды яратыу, телеңә хыянат итмәүҙә күрәм.

**Әйткәндәй, Рөстәм Динислам улы беҙҙең һөйләшеү барышында бер русса һүҙ ҙә ҡыҫтырманы, тотлоҡманы, буталманы. Башҡортса һөйләү телмәре яҡшы үҫешкән, фекерҙәре теүәл һәм йомғаҡлы уның. Төрлө темаларҙы ҡуҙғатып, оҙайлы аралашҡандан һуң, башта көлөмһөрәп биргән "Һеҙгә нисә йәш ул?" тигән һорауымдан оялып ҡуйҙым. Халыҡ дөрөҫ әйтә шул барыбер: ил ағаһы булыу өсөн һаҡал кәрәкмәй - аҡыл кәрәк.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

ӘЙҘӘГЕҘ, УҠЫЙЫҠ!



# ХӘРЕФ ТАНЫҒАН КӨЙӨ...

## наҙан булмайыҡсәле

**"Гәзит уҡымаған кешеләрҙе йәлләйем", тип яҙғайны "Киске Өфө" гәзитенең быйылғы тәүге һанында Баймаҡ районынан уҡыусыбыҙ Ынйыбикә Күсәева. Хәреф таный, уҡый-яҙа белгән грамоталы наҙандарға ҡарата бик дөрөҫ мөнәсәбәт был, мин дә шундай фекерҙә.**

Гәзит уҡымаған кеше китапты күптән уҡымай, ул турала һүҙ ҙә юҡ. Тимәк, бындайҙар бер генә килгән ғүмерҙәре эсендә ашап-эсеү хәстәре менән генә көн күрә булып сығамы? "Көн күрә" тип яҙам, сөнки бында "йәшәй" тип яҙыуы урынһыҙ һымаҡ. Йәшәү бит ул, шағирҙар теле менән әйткәндә, "йәшнәп-күкрәүҙәргә" тиң ғәмәл. Ашап-эсеү - беренсел ихтыяж, әлбиттә, тамағы ас әҙәмде гәзит уҡырға мәжбүрләп булмайҙыр. Илдә ниндәй генә көрсөк хөкөм һөрмәһен, башы-һаны теүәл уңған кеше ас ултырмайҙыр. Ике ҡулына бер эше булған ҡала халҡы ла, ҡырҡ эше ҡыйрап ятҡан ауыл хеҙмәтсәне лә йүнен күрә, хужалығын алып бара, мал аҫырай, балалар тәрбиәләй... Шул арала, ышанаһығыҙмы, гәзит ҡараштырырға ла форсат таба. Ул ғына ла түгел, өйөнә бер нисә дана матбуғат баҫмаһы яҙҙырып алдырып уҡығандар байтаҡ. Бәғзе берәү кеүек, "һыйыр ҡойроғона ғына ҡарап" йәшәмәйҙәр бер ҙә.

Бөгөнгө көндә гәзит уҡыу, яңылыҡтар менән хәбәрҙар булып тороу маҡтаулы эшкә тиң тойола миңә, гәрсә өйөнә гәзит-журнал алдырып уҡыусы быны кемдәндер баһа ишетеү өсөн түгел, ә фәҡәт үҙенең рухи ихтыяжын ҡандырыу маҡсатында эшләһә лә. Тимәк, бындай кеше бер ни ҙә уҡымаған замандашынан бер нисә башҡа юғарыраҡ, аңлыраҡ, йәнлерәк һәм йәмлерәк, сөнки донъялыҡҡа битараф түгел. "Дошмандан түгел, битарафтарҙан ҡурҡ" тигән бер аҡыл да бар бит. Шунан китап уҡыған, өйөнә гәзит алдырған, заманыбыҙҙың "йөрәк тибешен" тойоп йәшәгән кешеләр менән нисек ғорурланмайһың да, нисек итеп уларға маҡтау һүҙҙәре әйтмәйһең!

Иң ҙур рәхмәт һүҙҙәрен үҙебеҙҙең "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына еткерге килә, әлбиттә. Эшебеҙҙе хуплап, дәртләндереп, беҙгә темалар биреп торғандары, кис ултырып, күҙ нурҙарын түгеп, беҙгә хат-сәләмдәрен юллап торғандары өсөн. Шул уҡ ваҡытта беҙ йәш ғаиләләр йортонда ла гәзит-журналдарҙың көтөп алынған ҡунаҡ кеүек булыуын теләр инек: балалар уҡырға мәктәптә өйрәнһә лә, киң ҡарашлы, мәҙәниәтле шәхестәр булырға тыуған йортонда ата-әсәһенән өйрәнә бит.

Китап хәҙер ауыл йорттарында һирәк күренеш, тиһәм, үпкәләүсе булмаç. Уҡытыусыларҙа шулай ҙа бындай хазина етерлектер, тигән уйҙамын. Һәр ғаиләлә лә булыр ине улар, тик райондарҙа хәҙер китап сауҙаһы һүнеп ҡалды, ә ауыл ерҙәренә улар күптән килеп етмәй. Былтыр йәй элекке курсташ әхирәтем Өфөгә эш менән килеп киткәйне. Йомоштары күп ине, өҫтәүенә, Республика дауаханаһына ла барырға кәрәк ине уға. Шундай мәшәҡәттәренә ҡарамаҫтан, "Китап" нәшриәтенең фирма магазинына инеп сығырға ла ваҡыт таба алды ул һәм үҙенә, шулай уҡ ейән-ейәнсәрҙәренә ҙур ике сумка китап тейәп ҡайтып китте. Эйе, беҙҙең быуын китап уҡып үҫте. Шуға ла мин өйөмдә тупланған шәхси китапханама ҡарап, ҡыуанып ҡуям. Йәш саҡта эшләп йөрөгәндә бер ятаҡта йәшәгән тағы бер курсташ ҡыҙ иҫкә төштө: мин бөтөн аҡсама китаптар алһам, ул сумаҙан тултырып, ҡиммәтле сервиздар, сыңғырҙап торған нәфис гәлсәр һауыт-һаба, түшәк кәрәк-яраҡтары һатып алыр булды. Ул саҡ бындай тауарҙарға ҡытлыҡ ине, әлбиттә, ә бөгөн иһә теләгән нәмәңде һатып ал - аҡсаң ғына булһын. Ә бына мин шул йылдарҙа алған күп кенә китаптар бөгөн һирәк ҡулдарҙа ғына ҡалған библиографик хазинаға әүерелде. Хәҙер уларҙың ҡайһы берҙәрен китапхананан да табырмын, тимә. Телевизорҙан юҡ-бар ҡарағансы, ана шул әҫәрҙәрҙе ҡабат-ҡабат уҡыйһың, уҡыған һайын асыштарға юлығаһың, ошо китаптарҙа сағылыш алған тормош хәҡиҡәтен дә тәрәнерәк аңлайһың.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

***✓ Был юлы немец летчигы йыраҡтан уҡ ут яуҙырырға тотондо. Һибәтулла немец летчигының йөҙө айырым-асыҡ күренә башлау менән, уға төбәп атып ебәрҙе лә, күҙҙәрен йомоп, ергә һыйынды...***




– Воз-з-д-д-у-у-хх!.. Таралышырға-а-а!..

Өсәр рәт булып теҙелешеп, юл туҙанын кирза итектәр менән борхолдатып атлаусы полк туҡтап ҡалды. Йәш һалдаттар бер-береһен йыға-төртә тирә-яҡҡа һибелделәр. Был мәлдә колонна өҫтөнән генә осоп үткән "Юнкерс"тар, ҡорбанына ташланған ыласындар кеүек, кинәт кенә һауаға күтәрелделәр ҙә, ялт әйләнеп, колонна өҫтөнә уҡталдылар. Һибәтулла уңға-һулға, алға-артҡа йүгерешкән һалдаттарҙы йырып, колонна артында килгән зенит орудиеһы яғына йүгерҙе. Тирә-яғында бомба шартлауҙан хасил булған ер ҡап-ҡара һөрөм, дары еҫе менән тулды. Был мәхшәр эсендә йүгереп китеп барған Һибәтулланы кемдер үҙ кәүҙәһе менән бәреп йыҡты ла, ергә ҡыҫты. Ул ҡыҙыулыҡ менән ырғып тороп, артабан йүгерергә уйлағайны, теге әҙәм уның кирза кейгән аяғынан ҡосаҡлап, тағы ла ергә ауҙарҙы.

- Зениткаға барып етергә... Зениткаға барып етергә... - тип үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә йүгергән егет юлын бүлеүсегә күҙҙәренең ағы менән текәлде һәм аптырап ҡалды - үҙенең взвод командиры Семен икән. Семен граждандар һуғышында уҡ дары еҫе татыған өлкән генә старшина ине. Эргәләрендә генә шартлаған бомба гөрһөлдәүенән икеһе лә ергә һыйындылар. Командир һалдатының ҡайышынан бөрә тотоп алды ла:

- Ҡайҙа остоң, бөркөт? - тип ҡысҡырып һораны.

- Иптәш командир, самолеттар бит! Зенитканы табырға кәрәк, - тип яуапланы Һибәтулла.

Семен башын сайҡаны.

- Дөрөҫ түгел, һалдат! Бындай мәхшәрҙә һин пушканы таба алмайһың! Уны ездовойҙар ситкә алып китергә тейеш! Иҫеңдә тот, һин, балаҡай, үҙ башыңды һаҡла, хәҙерге мәлдә иң кәрәге - тере ҡалыу!

Шул саҡ һауала беҙҙең өсдүрт самолет күренде, әллә үтеп барышлай яңылыш килеп сыҡтылар, әллә инде ярҙамға килә ятыуҙары ине... Мәгәр фашистарҙың бер нисә истребителе беҙҙең был ҡыҙыл йондоҙло самолеттарҙы ҡамап та алдылар һәм пулемет, пушка уттары менән суҡый ҙа башланылар. Ике минуттан беҙҙең самолеттар берәм-берәм ергә ҡаҙалып, шартлап юҡҡа сыҡтылар.

- Да, егеттәр... Батырҙарса һәләк булдылар!.. Эх, инәнде генә... - тип һүгенде Семен. - Ҡайҙа һуң беҙҙең ҡыҙыл йондоҙло бөркөттәр? Нимә тип истребителдәргә ҡаршы был фанералаҙы ебәрәләр?

Шул саҡта Һибәтулла Семендың артында йәйелеп ятҡан ялан өҫтөнән туп-тура үҙҙәренә табан осҡан "Юнкерс"-ты күреп ҡалды. Теге тәреле ҡоҙғондоң тап үҙенә табан осоуын абайланы. Был донъяла һәр кешегә бер нисә тапҡыр иҫкәртеү һиҙгерлеге бирелә. Әммә был хистәргә беҙ бик үк иғтибар итмәйбеҙ. Әммә баш өҫтөнән генә үлем ғәрәсәте ҡупһа... Бындай мәлдә кеше үҙен ҡотҡарырлыҡ ҡыл нәҙеклек еп булһа ла тартып ҡарайҙыр... Йә ҡотолаһың, йә...

Немец летчиктары үҙҙәренә ҡуйылған бурысты үтәнеләр инде. Советтарҙың алғы һыҙыҡҡа китеп барыусы һуғышсыларына тәғәйенләнгән бомбалар ташланып бөттө, колонна тарҡатылды һәм... Бына ошо мәлдән алып 20-25 йәшлек немец летчиктары өсөн иң күңелле һәм иң ҡыҙыҡ кәмит башлана. Тере кешеләргә һунар уйыны. Үҙенең ғәйрәтле үкергән самолетының штурвалын ҡыҫып тотҡан Ганс йылмайып ҡуйҙы. Яғыулығының кимәлен күрһәтеүсе приборға күҙ һалды. О-hо-hо! Тағы ла иркенләп күңел күтәреп алырға ун биш, егерме минутлыҡ яғыулығы бар әле!

Кисә генә үҙенең һөйгән ҡыҙынан хат алды Ганс. Һөйгәне уның осоусы булыуы менән сикһеҙ ғорурланыуы, уның һәр бер хатын йоҡлар алдынан туғандарына ҡысҡырып уҡыуы тураһында яҙған. Ганс һөйгәненең оло камин алдында йыйылышып ултырған өлкән ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-ат алдында үҙенең "ҡорос бөркөтөнөң" батырлыҡтары тураһында ғорурланып бәйән итеүен күҙ алдына килтереп, ҡәнәғәт йылмайып ҡуйҙы ла, самолетын ҡырынайта биреп, колонна өҫтөнә уҡталды.

Һибәтулла тап үҙҙәренә йүнәлгән, пулеметтары менән һауа тетрәтеп үкереп килеүсе самолетҡа текәлеп, ҡатып ҡалды.

- Эх! - тип ҡуйҙы ул, сөнки ерҙе аҡтарып килеүсе пуля ямғыры һыҙығы туп-тура уларға табан килә ине. Атаһы Ғиниәтулланың әйткән һүҙҙәре иҫенә төштө. Беренсе герман һуғышында ҡатнашҡан ҡырыҫ ҡарт һалдат үҙенең улына тәү тапҡыр "балам" тип өндәшкәйне... Ул емерелгән ҡаштары аҫтынан ҡырыҫ ҡараштарын ғәзиз улына йүнәлтте лә:

- Балам... һин һуғышҡа китәһең... Унда бик яман, насар хәлдәргә тарырһың... Тере ҡалырға тырыш. Нимә генә булһа ла тере ҡалырға ынтыл... Нимә генә тимәһендәр, дошмандарҙан ҡурҡма... Улар ҙа шул уҡ әҙәм балаһы... Салт бул... Йә улар - һине, йә - һин уларҙы... Кем алдан өлгөрә, шул тере ҡала... Һеңгәҙәп йөрөмә - уяу бул. Тере ҡалырға тырыш, - тине лә, ялт әйләнеп, башын эйеп йоҡомһорап торған атына ҡысҡырып ебәрҙе. - Т-р-р-р! Мөстән! Ней тик кенә тора белмәйһең! - Ерән Ҡашҡа тертләп китеп, башын сайҡап бышҡырып ҡуйҙы ла, аптыраған күҙҙәре менән хужаһына боролоп ҡараны. Ә был мәлдә иһә үҙенә сират етеүен сабыр ғына көткән Ғәйникамал ғәзиз улын ҡосаҡлап, уның арҡаһын һыпыра-һыпыра доға уҡый ине.

- Йә, раббым, ошо улыҡайымды үҙ мәрхәмәтеңдән айырма.

Хәтәр хөрәфәттәрҙән, үлем-ҡазанан арала... Фәрештәләреңде юлдаш итеп, бер үк имен һау ҡайтырға насип ит...

Секунд араһында ошо хәтирәләрҙе күҙ алдынан үткәргән

Һибәтулланы ниндәйҙер көс аяғына баҫтырҙы. Ул йән көсөнә үҙҙәренә табан килә ятҡан пулялар ямғыры һыҙығынан ситкә ташланды. Урынында ятып ҡалған Семен:

- Стой! Куда, твою мать! Үләһең бит! - тип һүгенеп ҡысҡырып ятып ҡалды... Ниндәйҙер ярһыу көс Һибәтулланы ялан уртаһында бер үҙе генә һерәйеп ултырған телеграф бағанаһына табан йүгертте...

Штурвалын ике ҡулы менән ҡыҫып тотҡан Ганс пулеметын тоҫҡаусы прицел нөктәһен ерҙә һеңгәҙәп ятыусы һалдаттар өҫтөнә тоҫҡап, гашеткаһына баҫты. Самолетты дер һелкетеп дөкөлдәгән эре калибрлы пулеметтың, ерҙә саң-туҙан күтәргән пулялар һыҙығын һалдат кәүҙәләре аша үткәреү ауыр түгел ине. Селәү кеүек, баштары менән ерҙе тишеп керерҙәй булып ергә һеңешкән һалдат кәүҙәләренең, түмәргә балта сапҡан кеүек тертләп һикереп ҡуйған мәлдәренә ҡарап, эре калибрлы пуляларҙың тағы ла бер ҡорбан табыуын аңлауы ҡыйын түгел ине. Ярты илде тубыҡландырған, бөтә милләттәрҙән һәм бөтә расаларҙан өҫтөн торған Бөйөк Германияның һуғышсыһы, саф ариец, егерме биш йәшлек Ганс, күп тапҡыр хәрби наградалар кавалеры, үҙенең был аяуһыҙ һуғышта ҡатнашыуы менән ғорурлана ине. Бөйөк фюрерҙың бөтә ер шары хакимы булырға тейешлегенә ышана ине шул...

Ул үҙенең киске хатында һөйгәненә бөгөнгө осошта күпме дошман һалдаттарының башына етеүе хаҡында яҙасаҡ... Шул хаҡтағы хыялына биреләп, ул нисә һалдаттың башына етеүен һанай ине...

- Бер, ике... һигеҙ, туғыҙ... ун бер, ун ике...

Әммә уның ун өсөнсө ҡорбаны, ана, туп кеүек һикереп торҙо ла ситкә ялтанып өлгөрҙө... Немец летчигы йән асыуынан һүгенеп ҡуйҙы, аҙаҡ йылмайып ҡуйҙы. Бына, исмаһам, һунар! Ганс үҙен ысын һунарсы итеп тойҙо. Үҙенең броня менән көпләнгән, пушка-пулемет менән ҡоралланған хәрби штурмовикта ултырыуын, ә ерҙәге һалдаттың ҡола яланда тороуын, карабиндан башҡа ҡоралы булмауын иҫәпкә алмаҫҡа тырышты, тырышты түгел, бөтөнләй иҫәпкә алманы...

Һибәтулла был мәлдә бер үҙе юл ситендә һерәйеп ултырған бағана төбөнә килеп һыйынды... Урман балалары, урман балалары инде. Бүренән ҡасһа ла ла, дошмандарҙан ҡасһа ла, ҡойма ямғырҙан ҡасһа ла, хәтәр дауылдан ҡасһа ла - урманға, ҡайындар араһына, ағастарға һыйына.

Ганс самолетын үкертеп, ҙур түңәрәк яһап, ҡабат әйләнеп килде. Дөрөҫөн әйткәндә, ул әллә ҡасан уҡ ҡайтып китә ала ине. Хәрби бурыс үтәлде, бомбалар ырғытылды, колонна тарҡалды... Әммә уның һөйгәненә яҙасаҡ хатының ун өсөнсө ҡорбаны... Юҡ, әлегә ҡорбан түгел... Бына хәҙер... Ул ниндәйҙер ырылдауға оҡшаған өн сығарып, гашеткаларына баҫты.

Һибәтулла һауала ҡолаҡ тондорғос имәнес тауыш менән үкереүсе ҡорос дошман самолетының нәҡ үҙенә һунар ойоштороуын аңланы. Ул үҙен ҡарсығанан ҡотолоп маташыусы бәләкәй генә ҡошсоҡ итеп тойҙо. Йәмле Һаҡмар йылғаһының, ике яҡ ярында тау битләүҙәрен ҡаплаған йәмле урман буйында үҫкән йәш кенә егет, үҙ ғүмерендә ат арбаһынан башҡа техника, ҡушкөбәктән башҡа ҡорал күрмәгән тәбиғәт балаһы һәм ярты донъяны баҫып алған дәһшәтле дошман армияһының штурмовигы - уларҙы осраштырыусы бер бағана... Ниндәйҙер хикмәт менән бер үҙе имен ҡалған телеграф бағанаһы...

Һибәтулла, ер һелкетеп, пулеметы менән ерҙең аҫтын-өҫкә килтереп, саң-туҙан өйөрөлтөп, үҙенә уҡталыусы самолеттан күҙен алмай ҡатып ҡалды. Саң-туҙан борҡотоп килеүсе пулялар ямғыры һыҙығы үҙенә килеп етте тигәндә генә, ул кәүҙәһен бағананың икенсе яғына алып ташланы. Күҙҙәрен сытырҙатып йомған егет үҙенең өҫтөнән осоп үткән ҡорос ғифриттең ялҡынлы тынын тойғандай итте. Бер нисә сантиметр ғына ситтә ҡаҙалған эре калибрлы пулялар шатыр-шотор килтереп бағананың да ағас ҡайырсыларын теткеләп үткәйне...

Һибәтулла күҙҙәрен асып, имен ҡалыуына ҡыуанып өлгөрмәне, әле генә үҙенең йәнен ала яҙған самолеттың, оло түңәрәк яһап, кире үҙенә табан уҡталыуын күреп, бағананың икенсе яғына күсеп ятты. Ҡорос каскаһын рәтләп батырыбыраҡ кейҙе лә, ергә һеңешеп, ҡуҙғалмай ятҡан кеше рәүешен алды. Әммә каскаһының ҡырынан ғына үҙенә табан уҡталыусы тимер ҡарсығанан күҙ яҙҙырманы...

Инде үҙенә баш эйгән ҡорбанын юҡ итеүенә шикләнмәгән Ганс, самолетын уңғараҡ ҡайырып, ергә лыпым һылашып ятыусы ҡорбанын прицелға алып, гашеткаһына баҫты, тик пулеметы гөрһөлдәп ата башлар алдынан ғына прицел түңәрәгендәге һалдат юҡҡа сыҡты...

Ниндәйҙер эске тойғоһона инанған Һибәтулла үҙ-үҙен орсоҡтай өйөрөлдөрөп, бағананың икенсе яғына әйләнеп ятырға ла өлгөрмәне, элек ятҡан урынына эре калибрлы пулялар килеп ҡаҙалды. Бағананы тумарлап әйләнгән мәлдә ниҙер "шаҡ" итеп каскаһына бәрелде. Йәһәт кенә башын һәрмәп тикшереп алған Һибәтулла каскаһына үҙенең арҡаһына аҫып алған карабинының көбәге бәрелеүен аңланы. Ул тиҙ генә карабинын сисеп, ҡулына тотто. Бағана осона бәрелә яҙып осоп үткән дошман самолетының оло түңәрәк яһап борола башлауын күреп, Һибәтулла әсәйенән отоп алған доғаларын уҡый башланы...

Үҙҙәренең эскадрильяһында иң мәргән летчик һаналған Ганс баштараҡ ҡыҙыҡ күреп башлаған һунарының оҙаҡҡа һуҙылып китеүенә йәне көйҙө. Командирҙарының рация аша "Өс минуттан аэродромға ҡайтырға! Өс минуттан ҡайтырға ҡуҙғалырға!" тигән бойороғон ишетеү немец летчигына ҡамсы менән һыҙырғандай тәьҫир итте. Самолетын һулға ҡайырып, ҡанаттары менән ергә бәрелә яҙып тигәндәй яңы боролош яһаны ла, ялан уртаһында һерәйгән бағанаға табан тағы уҡталды...

Һибәтулла карабины көбәген үҙенә табан осоп килгән самолетҡа төбәп, ҡатып ҡалды. Был юлы немец летчигы йыраҡтан уҡ ут яуҙырырға тотондо. Һибәтулла самолеттың ер һелкетеп, ут сәсеп килеүенә иғтибар итмәҫкә тырышып, немец летчигының йөҙө айырым-асыҡ күренә башлау менән, уға төбәп атып ебәрҙе лә, күҙҙәрен йомоп, ергә һыйынды...

**(Дауамы бар).**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*




# КӘКЕРЕ ҠАЙЫН КӘКЕРЕМЕ,

## йәки Баймаҡ яҡтарындағы ҡыҙыҡ хәлдәр

**Баймаҡ яғындағы был мәрәкәле хәлдәрҙе Икенсе Этҡол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов һөйләнә. Гәзит уҡыусылар был уҙаманды "СМС-әйтеш" конкурсының бер нисә тапҡыр еңеүсеһе Айыҭҡужа сәсән итеп тә белә.**

### Әсәйем һөйләгәндән

Темәс ауылында бер әбей: "Әүәле, беҙ йәш саҡта, һарыҡтар "бә-ә-ә-ә", тип баҡыра торғайны. Хәҙер ауыҙын аса ла ҡуя, ялҡауҙар", - тип һуҡрана икән. Ҡартайғас, ҡолаҡҡа ҡатыланғанын иҫәпкә алмаған, күрәһең.

Әүәле, тигәндән, әүәле беҙҙә сусҡалар мырҡылдай торғайны, хәҙер гәзит биттәрендә улар, ниңәләр, хорхолдай башлаған. Тыуған телдә уҡымауҙың касафатылыр был. Былай барһа, тиҙҙән баҡалар квакать, ҡоштар петь итә башламаҫ, тимә...

### Гәзиткә иғлан

Баймаҡҡа йомош менән килдем. Танышым Вәкил тап булды. Бер аҙ һөйләшеп торғайныҡ, ул минең ни эш бөтөрөп йөрөүем менән ҡыҙыҡһынды. "Район гәзите "Һаҡмар"ға "60 йәшлек бисәмдә 30 йәшлек икеүгә алыштырам!" тип иғлан бирергә килдем", - тип шаяртыуым да булды, Вәкил: "Ә улайтып буламы һуң?" - тип ысынтыланы ла китте малайың. Шунан тағы икеләнеп һораны:

- Әгәр ҙә ике 30-ҙағылар йәшәрлек булмаһа, нимешләмәксе булаһың?

- Йәшәрлек булмаһа, "бер 40 йәшлек менән бер 20 йәшлеккә", йә булмаһа, "бер 35 йәшлек менән бер 25 йәшлеккә", тигән варианттар ҙа бирҙем, тигәс, йүгерҙе Вәкилем редакцияға...

### Кәкере ҡайын кәкереме?

Әсәйемдәрҙең күршеләренең аҡылға зәғиферәк ҡыҙы булған. Урамдарында кәкере ҡайын үҫкән уларҙың. Бер мәл шул ҡыҙ туҡтауһыҙ сеңләп илай икән. Ни өсөн илағанын һорағастар:

- Мин ҙурайһам, кейәүгә сыҡһам, бәләкәс балам булһа, балаҡайым ошо ҡайынға менеп уйнайым тип, ҡолап төшөп үлер инде, - тип тағы ла ярһып илай икән ти.

Ошонан һуң уны аҡылға зәғиф тип әйтеп ҡарағыҙ. Ул ҡыҙ киләсәкте уйлай белгән. Шундай һорау тыуа: кәкере ҡайын кәкереме лә, аҡылға зәғиф ахмаҡмы?

### Билал ауылында ишеттем

Уҙған быуаттың 50-се йылдарының аҙаҡтарында бер урыҫ милләтле кеше Билалға килеп, халыҡтың һыйырҙарын партия ҡушыуы буйынса яһалма ҡасырып йөрөй икән. Кешеләр алдан тәғәйенләнгән урынға һыйырҙарын етәкләп килтереп тора, урыҫ әмәлдәп ебәреп тора, ти. Бер бабай кәзәһен етәкләп килтергән дә:

- На, друг, сперва коза попробуй. Сумеешь, корову принесу, - тигән.

Билал, Һәмән яҡтарында шаян, мәрәкә кешеләр йәшәй шул.

### Шәп эш

Иҫке Сибай ауылында шабашкала йөрөгән саҡ. Ауылға ялға ҡайтҡан бер мәлдә Салауат тап булып:

- Айға, көнгә күренмәй, ҡайҙа йөрөйһөң ул? - тип һораны.

- Иҫке Сибайҙа тауыҡ фермаһында осеменатор булып эшләйем, - тип яуап биргәйнем, әллә һөкланды, әллә көнләште, әллә бер нәмә лә аңламаны:

- Ҡалай шәп эшкә төшкәнһең, - тип әйтеп һалмаһынмы...

### Йөҙә белмәгән ҡаҙ

Хәйбулла районында бер апайға өй эшләйбеҙ. Бер көндө уның ҡыҙына шаяртып:

- Күршегеҙҙең ата ҡаҙы һыуға батып үлгән, - тинем.

- Эй, бахыр, шул инәйҙең ҡаҙҙары ҡазалана ла тора шул, -тип ауыр уфтанып ҡуйҙы ҡыҙ.

"Һе" тип уйлап ҡуйҙым шул саҡта, йөҙә белмәгән ҡаҙҙар ҙа була икән...

### Тәлғәт, исемең кем әле?

Ҡустым шофер булып эшләгәйне. Ауылдашым, билдәле ҡурайсы Зыя Хәлилов Бөрйән ҡыҙына өйләнгәс, ауылдан туйға ҡоҙа алып барған. Элек Бөрйән районы менән Баймаҡ райондары араһында юл булманы. Йырҙа йырланғанса, Салауат күпере аша ғына йөрөй торғайныҡ. Коммунизм төҙөүсе ил Бетерә менән Алғаҙы ауылдары араһында 18 саҡрым юл да төҙөй алманы. Асфальт-бетондарҙы күберәк һәйкәлдәргә тотонғандарҙыр инде.

Шулай итеп, ямғыр яуып, беҙҙекеләр батҡандар. Зыяның атаһы Ишбулды ағай ағас киҫкәһе һөйрәп килтергән дә:

- Тәлғәт, исемең кем әле. Онотоп торам. Ошо ағасты һалһаҡ, сыҡмаҫмы икән? - тип һораған.

Бәлә бергә йөрөгән кешенең дә исемен онотторa шул. Хәҙер өсөһө лә мәрхүмдәр.

### Лимит

Ваҡытында Бөрйән районында урында эшләгән берәү менән эсеп ултырабыҙ. Ул көрәгәсе. Рюмкаға аҙ генә ҡоя ла, бик оҙаҡ хәбәр һөйләй был. Мин ни иҫерә, ни айныға алмай, ҡасан миңә лә ҡоя инде, тип, түҙемһеҙләнеп ултырам. Ултырып-ултырҙым да:

- Мин - алкаш-любитель, һин профессиональ икән, - тинем.

- Ә уларҙың араһында ниндәй айырма бар һуң? - тип һораны ул күтәргән рюмкаһын кире ҡуйып.

- Профессионалдар кабинетта сейфтан алып, әҙләп кенә ҡойоп, тәмләп кенә, тағы ла төрлө банкеттар ойоштороп бюджет аҡсаһын эсәләр. Ә минең кеүек любителдәр эшләп йә әҙләп тапҡан аҡсаһына араҡы һатып алып, "сүп" төшмәһен, тип, йәһәтләп ҡырлы стаканға ҡойоп, бына ошолайтып тондоралар ҙа, йоҙроҡтарын еҫкәйҙәр. Ни тиклем ғүмерлек лимитыңды тиҙерәк тултырһаң, шул тиклем эсеүҙе тиҙерәк ташлайһың, - тинем дә, ҡуйындан ҡырлы стакан сығарып, тултырғансы ҡойоп эсеп тә ебәрҙем. Һуңынан теге иптәш минең яуапҡа разый булып, тимәк, үҙенең профессиональ булыуын танып, маҡтанып, һәр ваҡыт һөйләп көлөп йөрөнө.

Был ваҡиғаға ун йыл үтте инде. Танышым һаман да лимитын тултыра алмайынса ҡуләүектән семсеп һыу эскән ҡош кеүек ҡыланамы икән, унынһын белмәйем. Ә мин эсмәйем...

### Тыныс мейес

Йәйгеһен мейес сығартҡайным. Әхмәтгәзе:

- Мейесең ҡыҙыумы? - тип һораны.

- Пока тыныс, түҙерлек, - тип яуап бирҙем.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

*ТӘБРИКЛӘҮ ҺҮҘЕ*

# КҮҢЕЛ КҮҘЕҢ АСЫҠ ҠАЛДЫ...

**Әсәйем Мусина Бибиямал йәшләй генә һуҡыр ҡалды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан уның зиһен күҙе үткер. Донъялағы һәм республикалағы ваҡиғаларҙы күҙәтеп-белеп бара. Көнө-төнө "Юлдаш" радиоһын тыңлай. Мин уға "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырып уҡыйым. Ул йәмле яҙ айының башында донъяға килгән. Яратҡан гәзитем уҡыусыларына тәҡдим иткән шиғырымды уға бағышлайым.**

### Ысын йөрәк

*Ныҡ кешеләр бит беҙ, әсәй,*
*Күпте татып, күпте күрҙек.*
*Фәрештәләр дошмандарҙан*
*Беҙҙе һаҡлап, ҡанат кирҙе.*

*Рәнйеткән дә булғанмындыр,*
*Ғәфү итә һин күр инде.*
*Һиңә сабый булһам да бит,*
*Үҫеп еттем, мин ҙур инде.*

*Беҙҙе артыҡ яратҡанға,*
*Әллә Хоҙай асыуланды.*
*Йәшләй генә һуҡыр ҡалдың,*
*Күңел күҙең асыҡ ҡалды.*

*Ҡәҙерлем һин, берәү генәм,*
*Йәшә, әсәй, бул һин түҙем.*
*Хоҙайҙы бит күрер өсөн*
*Кәрәк түгел маңлай күҙе.*

*Яратам, тип әйткән дә юҡ,*
*Әммә һүҙҙәр кәрәк микән?*
*Бер туҡтауһыҙ "Әсәй!" тиеп*
*Типкән ысын йөрәк икән.*

*Ғүмер биргән биш ҡыҙың да,*
*Һин, тип йәшәй, ҡайғырма һин.*
*Ғүмергәсә бер булайыҡ,*
*Беҙҙе Хоҙай айырмаһын.*

**Рәзинә Бикташева.**
**Баймаҡ районы Темәс ауылы.**

*ХИКМӘТЛЕ ХӘРЕФТӘР*

# БӘШМӘККӘ БАРҘЫҠ



Баныу, Бикә, Бибисара бергәләп бәшмәккә барырға булдылар. Бәлеш, бөйөрәк бешереп, билбауға бөрөп, билдәренә бәйләнеләр. Балаларына бығыр-бығыр бутҡа бешерҙеләр, балыҡ быҡтырҙылар. Бикмырҙа, Баныуҙың бабайы, былар бәшмәктә булғанда балаларҙы бағыр.

Бик белдекле булып биттәренә битлек бәйләнеләр - безелдәшкән бөжәктәр бимазалаһын бер-бер. Буйынанбуйы байғош барҡылдаҡ барҡылдаған, бытбылдыҡ бытылдаған боронғо баҫыу буйлап белгилке барғас, былар бер болонға барып баҫтылар. Болон бәрхәт балаҫтай балҡый.

Былдағы бәшмәк! Бармаҡ башындайы, баҡа башындайы, быҙау башындайы ла бар. Бына баллы бәшмәк. Бәгзе берҙәре башына бөрләтин бөркәнсек бөркәнгән, бәгзеләре биҙәкле бүректә. Балланып бүртенгәндәр. Барыһы-барыһы балитәкле. Былар, быйдайынса биҙәнеп, батша балына барырға булғандарҙыр. Барһындар, бынағайыш!

Бибисара, Бикә, Баныу болондоң былай бөтөнлөгән боҙорға баҙманы. Былай булмай. Бәшмәктәрҙең баллыһы ла, балһыҙы ла бурһыҡтарға, боландарға булһын.

Бураларҙа бойҙай, бауҙа балан, батманда бал, баҙҙа бәрәңге барҙа, бәй, бәшмәкһеҙ ҙә бирешмәбеҙ. Бәрелмәйек бәшмәктәргә!

Башҡортостаныбыҙҙың байлығын ботарламайыҡ! Бәхәсте бөтөрөп, былар бүҙәнә бипелдәгән битләү буйлап барып-барып, бер бүрәнә баҫмаға баҫтылар. Бик боронғо баҫма булғанлыҡтан, бүрәнә бурһыған булған. Былар баҫҡанға бәүелдe, быртылданы. Бикә, Баныу, Бибисара барыбер берәм-берәм бирьяҡҡа барып баҫтылар. Бына Баныуҙарҙың бәрәңге баҡсаһы. Булды, бөттө бәшмәккә барыу.

Барығыҙ ҙа бай булығыҙ, бар булығыҙ!

**Фәрзәнә ХАММАТОВА,**
**педагогия хеҙмәте ветераны.**
**Әбйәлил районы Ишкилде ауылы.**

✔ *Тәмәке тартҡанда организмда ҡан әйләнеше боҙола һәм бала мейеһенә ҡан килеүҙе өлөшләтә блокадалай. Шул сәбәпле нервылар системаһы һәм психикаһы тыумыштан боҙолған балалар тыуа ла инде.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТАТЛЫ РИЗЫҠТЫ...

## иртән ашама

■ Башҡаларға гел ярҙам итеү һыҙаты кешегә тыумыштан бирелә тигән фекерҙә Кентукки колледжы ғалимдары. Улар әйтеүенсә, альтруист кешеләрҙең баш мейеһе төҙөлөшө башҡаларҙыҡына оҡшамаған. Баш мейеһенең хис-тойғолар менән бәйле өлөшө күпкә әүҙемерәк. Быны тикшереп ҡарау маҡсаты менән ғалимдар үҙенең бөйөрөн ауырыуға биргән 19 кешенең һәм донор булыуға ҡырҡа ҡаршы 20 кешенең баш мейеһен тикшергән. Мейене сканерлаған мәлдә һәр ҡатнашыусы ҡурҡҡан, асыуланған һәм үҙен тыныс тотҡан кешеләрҙең фотоһын ҡараған. Альтруист донорҙарҙың баш мейеһе төҙөлөшөндә айырымлыҡтар булыуы асыҡланған, улар башҡаларҙың бәләһен ныҡ ғыраҡ кисерә икән.

■ Насар кәйефтән ҡотолоу өсөн иртән 20 грамм ҡара шоколад ашарға була, тиҙәр. Тик ас ҡарынға татлы ризыҡ ашау дөрөҫ түгел. Ул ашҡаҙан аҫты биҙен әүҙемләштерәсәк, уҙ сиратында ул күп итеп инсулин бүлеп сығарасаҡ. Етмәһә, тәмтом аппетитты аса, 40 минуттан һуң ныҡ итеп асығасаҡһығыҙ. Ҡанда шәкәр кәмегәс, арыу һәм апатия барлыҡҡа килә. Шуға ла көндө дөрөҫ башлағыҙ - һыуҙа бешкән һоло бутҡаһы, көрпәле икмәк ашағыҙ. Киви, әфлисун, алма һәм башҡа татлы емештәр үҙәкте көйҙөрә. Емеш-еләкте иртәнге аштан һуң ашарға ярай. Был яңы һығылған һуттарға ла ҡағыла.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары витаминдар ҡабул итеү һәм өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы үлем осраҡтарының йышайыуы араһында бәйләнеш барлығын тикшереп ҡараған. Белгестәр билдәләүенсә, организмға ысынлап та витаминдар етешмәгәндә генә витаминдар әсеү файҙалы. Әгәр улар артыҡ икән, был үмер оҙайлығына йоғонто яһай. Һынауҙарҙа 50-60 йәшлек 38 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙың барыһы ла һуңғы 20 йылда яҡшы тукланған, витаминдар ҙа ҡабул иткән. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, мультивитаминдарҙы, фолий кислотаһын, В6 витаминын, магний, цинк, баҡыр һәм тимерҙе артыҡ ҡулланыу үлем хәүефен булдыра. Ғалимдар әйтеүенсә, кальций, кирһенсә, был хәүефте түбәнәйтә. Шулай ҙа ла табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ.

■ Финиктарҙы күп итеп ашау ҡартайыу процесын яйлата, ти ғалимдар. Һынауҙарҙа ҡатнашыусылар ике ай дауамында даими рәүештә финик ашаған. Көнөнә 100 грамм ашарға кәрәк. Эксперимент барышында ҡатнашыусыларҙың ҡан составын күҙәткәндәр. Шулай уҡ бауыр һәм бөйөрҙәр эшенә иғтибар иткәндәр. Финиктар холестерин кимәлен 15 процентҡа түбәнәйткән. Был иһә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен һәм атеросклерозды булдырмай. Шулай уҡ финиктар ҡандың әселәнеү, тимәк, организмдың ҡартайыу процесын яйлата. Был емеш артыҡ ауырлыҡҡа ла килтермәй.

■ Америка ғалимдары раҫлауынса, баш мейеһе эшмәкәрлеге эше бер ҡасан да яйламай, кирһенсә, 50 йәштәр тирәһендә баш мейеһенең иң әүҙем мәле тура килә. Олоғая килә баш мейеһендә миелин күләме күтәрелә, ул нейрондар араһында сигналдар үтеүен тиҙләтә, тимәк, кешенең интеллектуаль һәләте яҡшыра.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Оло ҡаҙаныштары, фәнде, медицинаны үҫтереүҙәге өлөшө өсөн Өфө ҡалаһы хакимиәтенең, Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең Маҡтау ҡағыҙҙары, дипломдарына лайыҡ булған Өфө ҡалаһының Тиҙ медицина ярҙамы дауаханаһы (22-се дауахана) быйыр үҙенең 25 йыллығын билдәләне. Ошо ваҡыт эсендә унда барлығы 1 миллиондан ашыу кеше медицина ярҙамы алған. Ә 2008 йылда ул "Бөтә Рәсәй почет китабы"на һәм "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы" исемлегенә индерелә. Бөгөн баш табип Ирина КАРАМОВА гәзит уҡыусыларҙы 22-се дауахана менән таныштыра.**



# КЕШЕ ҒҮМЕРЕН ҠОТҠАРЫУ -

## ул йәшәү рәүеше

➔ **Ирина Марсиловна, моғайын, һеҙ етәкләгән учреждениеның атамаһы уҡ кешелә һорау тыуҙыралыр - ни өсөн тиҙ ярҙам дауаханаһы, медицина учреждениелары барыһы ла ауырыуҙарға тиҙ ярҙам күрһәтергә тейеш түгелме ни?**

- Әлбиттә, теоретик яҡтан шулай, әммә тап беҙҙең учреждение Башҡорт дәүләт медицина университетының 8 кафедраһы өсөн база булып тора һәм беҙҙә кафедра хеҙмәткәрҙәре менән берлектә кеше ғүмерҙәрен ҡотҡарыуға ярҙам иткән бик күп тиңе булмаған диагностика һәм дауалау ысулдары уҙләштерелә. Дауахана тәүҙә Өфө ҡалаһының көнъяҡ өлөшөндә йәшәүселәргә тиҙ ярҙам күрһәтеү өсөн махсус ойошторолһа ла, бөгөн ул республика статусына эйә һәм тәүлек әйләнәһенә ашығыс ярҙам талап ителгән пациенттарҙы, шул иҫәптән ҡан тамырҙары ауырыуҙары киҫкенләшеүселәрҙе, йәрәхәт алыусыларҙы, бәхетһеҙлек осраҡтарына эләгеүселәрҙе, күпләп зыян күреүселәрҙе, һәләкәттәрҙе, бәлә-ҡазаға тарыусыларҙы һ.б. ҡабул итәбеҙ. Төбәк халҡына ашығыс һәм тиҙ ярҙам күрһәтеү хеҙмәтенең һуңғы йылдарҙа йылдам темптар менән үҫеүе һөҙөмтәһендә дауахана базаһында ике ҙур - ҡан тамырҙары һәм травматология үҙәктәре булдырылды. Ғөмүмән, тиҙ ярҙам талап ителгән ауырыуҙарҙың күләме 70 процентҡа, ҡайһы бер осраҡтарҙа 95 процентҡа етә. Һәм дауаханалағы 1148 хеҙмәткәр, шул иҫәптән 4 медицина фәне докторы, 41 фән кандидаты, төрлө абруйлы исемгә лайыҡ булыусылар ошо бурысты атҡара.

➔ **Егерме биш йыллыҡ медицина учреждениеһын нисек ҡылыҡһырларға мөмкин?**

- Сирек быуат эсендә дауахананың структураһы бер нисә тапҡыр тамырынан үҙгәрҙе, эшмәкәрлектең яңы йүнәлештәре үҙләштерелде. Республикала беренсе булып хәҙер инде ғәҙәтигә әйләнгән лапароскопик операциялар яһаныҡ, балаларҙы киҫкен стенозланыусы ларинготрахеит сиренән дауалау үҙәге эшләнә. Һөҙөмтәлә балаларҙың ошо сирҙән вафат булыу күренеше туҡтатылды. Тап беҙҙең дауахана республикала берҙән-бер балалар һәм үҫмерҙәр гинекологияһы үҙәге эшләп, уникаль операциялар яһалды. Бер нисә йыл дауамында беҙҙә Республика бешеү үҙәге урынлашты һәм ошо ваҡытта балалар һәм ололар бары тик беҙҙә генә комбустиология профиле буйынса медицина ярҙамы алды. Дауахана Башҡортостанда яңы медицина технологиялары ҡулланыу буйынса алдынғы үҙәк булып тора, яңынан-яңы диагностика һәм дауалау ысулдары индерелә. Эске ағзалар хирургияһына эндоскопик һәм аҙ травмалы хирургик технологиялар ҡулланыуҙы индергән өсөн 2007 йылда БР Президентының дәүләт премияһына лайыҡ булдыҡ.

➔ **Сирлеләр өсөн дауахана ярҙамы ҡабул итеү бүлмәһенән башланалыр...**

- Тап шулай. Ул ғына ла түгел, күп осраҡта тап ҡабул итеү бүлмәһендә аныҡ, дөрөҫ диагноз ҡуйып, артабан ваҡытында дауалау кешенең ғүмерен ҡотҡарып ҡалыуҙа ҙур роль уйнай. Был йәһәттән дауалау сифатын күтәреү һәм тиҙләтеү маҡсатында һуңғы йылдарҙа ҡабул итеү бүлмәһенең, операция блоктарының, лаборатор һәм ҡорамал-диагностика комплексының реанимация бүлексәләрендә реконструкция эшләнде. Улар ауырыуҙарға тиҙ һәм сифатлы ярҙам күрһәтеүгә булышлыҡ итеүсе рентген һәм УЗИ, клиник лаборатория, компьютер томографияһы, фиброгастродуоденскопия, ЭКГ кеүек аппаратуралар менән йыһазландырылған.

➔ **Башҡа дауаханаларҙан айырмалы, ниндәй үҙенсәлектәрегеҙҙе билдәләп китер инегеҙ?**

- Урология бүлеге эндоурологик операциялар буйынса пионер булып һанала. 1993 йылда бөйөл ҡыуығындағы таштарҙы рентген тулҡындары менән ваҡлау (литотрипсия) бүлеге асылһа, ике йылдан баш ҡалала беренсе тапҡыр трансуретраль резекция, уретерореноскоп һәм контактлы лазер литотриптор ҡулланып, операциялар яһай башланыҡ.

Операция блогы 17 операция залынан тора һәм 17 операция өҫтәлено иҫәпләнгән. Уларҙа йылына 6 мең самаһы кешегә операция эшләнһә, яҡынса 10 мең самаһы пациент яраларҙы бәйләү һәм реанимация залдарында медицина ярҙамы ала. Ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуғанда тиҙ ярҙам күрһәтеү өсөн нейрохирургик һәм травматологик бригадалар ойошторолған, улар тулыһынса йыһазландырылған.

Әлеге ваҡытта дауаханала оололар өсөн - әс, балалар өсөн бер бүлексәнән торған ҡеүәтле реанимация хеҙмәте бар һәм улар аша йылына 1300 пациент үтә. Төрлө дауалау алымдары ҡулланыуҙан тыш, хәлдәре ныҡ ауыр пациенттарҙы энтераль һәм парентераль туҡландырыу ысулдары ҡулланыла. Дөйөмләштереп әйткәндә, дауахана заман менән бергә атлай.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

ТӘМӘКЕ-САБАҠЫ

# "ӘСӘЙ, МИН ТОНСОҒАМ!.."



**Ҡыҙым менән урамда йөрөгәндә ҡаршыбыҙға ҡулына йәшереп кенә тәмәке тотҡан сираттағы ауырлы ҡатын осраны. Бындай күренеште күргәндә күҙҙәремә йәш тығылыуы ҡасан үтер икән? Хатта әйтер һүҙҙәремде әйтә алмай, тамаҡтағы төйөрҙө йоторға тырыштым.**

"Әсәй, тартма, мин тонсоғам!" - тип ҡысҡырыр ине ҡарындағы бала, әгәр уны ишетеүсе булһа. Әммә ул әсәһенең ауыҙындағы утлы торонбашты ала ла, үҙенә ни тиклем ҡыйын икәнен әйтә лә алмай шул, үкенескә күрә. Ләкин һуңғараҡ уҙ һүҙен әйтәсәк әле...

Ҡарындағы балаларҙың, әгәр уларҙы әсәһе мәжбүр итмәһә, бөтөнләй тәмәке тартырға теләктәре юҡ. Ололарға сәләмәтлеген тәмәке менән ағыулап юҡҡа сығарыу өсөн тиҫтәләрсә йылдар китһә, яралғыға зыян килтереү өсөн бер нисә аҙна ла етә. Никотин яралғының дөйөм үсешенә генә йоғонто яһамай, уның психикаһын да үҙгәртә. Тәмәке тартҡанда организмда ҡан әйләнеше боҙола һәм бала мейеһенә ҡан килеүҙе өлөшләтә блокадалай. Шул сәбәпле нервылар системаһы һәм психикаһы тыумыштан боҙолған балалар тыуа ла инде. Тәмәке тартҡан әсәйҙәрҙән церебраль фалиж диагнозы менән балалар йышыраҡ тыуа. Бындай әсәйҙәрҙең балалары физик йәһәттән генә түгел, аҡыл, хис-тойғо үҫеше йәһәтенән дә тотҡарлыҡ кисерә. Улар тиндәштәренән һуңыраҡ уҡый һәм һанай башлай, буйға үҫкәндә лә тотҡарлыҡтар күҙәтелә.

Тәмәке тартҡан әсәйҙәрҙең балалары пневмония һәм бронхиттың ауыр сағылышы менән дауаханаларға эләгә, кесе йәштә астма менән ауырыу хәүефе юғары була, ҡайһы берҙә аяҡтарында йәки ҡулдарында артыҡ бармаҡтар үҫә. Әгәр әсә кеше малай көтһә, уның үҙенең тәмәке тартыуы уны ейән-ейәнсәрҙәр һөйөүҙән мәхрүм ҡалдырасаҡ, сөнки тәмәкесе ҡатын-ҡыҙҙарҙан тыуған малайҙарҙың организмы эшләп сығарған мейеһенән һаны 40 процентҡа кәмерәк була.

Йөкләләк - яңы кешегә ғүмер биреү - әсәнең ҡарары. Тәмәкене ташлау - балағыҙҙың исеменән ҡабул ителгән ҡарар. Был алама ғәҙәтен ташларға теләмәгән әсәйҙәр, уйланығыҙ: һуңынан балаларығыҙҙың күҙенә нисек ҡарарһығыҙ, сөнки тәмәке тартҡан әсәйҙәр уртаса алғанда ете йылға кәмерәк йәшәй. Әле тыумаған балағыҙҙы ла бары тик әсәйҙәрҙең айыҡ аҡылы ғына һаҡлап ҡалған кеүек, тыуғас та, нисә йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, балаларға барыбер әсәй кәрәк...

**Наталья БРАЖНИКОВА,**
**5-се ҡала дауаханаһының медицина профилактикаһы бүлеге мөдире.**

***✓ Ағинәйҙәр милли кейем хаҡында ла етди кәңәш ҡорҙо. Үҙебеҙҙең ерлеккә, ырыуҙарыбыҙға хас камзул, күлдәк, ҡашмау, түшелдерек, селтәр, яғаларҙы тергеҙеүҙе бурыс итеп алып, ошо юҫыҡта даими эш алып барырға килештеләр.***



ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# БАШ ИТЕ - БАШҠА ДАУА



**Хәйбулла районының Быҙаулыҡ ауылы ағинәйҙәре Йылайыр районының Янманһаҙ ауылы ағинәйҙәрен һәм аҡһаҡалдарын баш ите ашатыу мәжлесенә ҡунаҡҡа саҡырҙы.**

Быҙаулыҡ ауылы ағинәйҙәре ҡоро етәксеһе Гөлкәй Байсуринаның иркен, матур йортонда ойошторолған был мәртәбәле сараға балалар ҙа килгәйне. Маҡсаты билдәле: халҡыбыҙ йолалары артабан ошо йәш быуынға тапшырылырға тейеш. Ҡунаҡтарҙы буҙа һәм бауырһаҡ менән ҡаршылағас, Гөлкәй Байсурина баш ите ашатыу йолаһының тарихын һөйләп ишеттерҙе:

- Ислам динен ҡабул иткәнгә тиклем, мәжүсилек ваҡытында, башҡорттар хайуандарҙың рухтарына хөрмәт йөҙөнән, төрлө йола байрамдары ойошторор булған. Мәҫәлән, мал һуйғас, уларҙың рухы зыян итмәһен өсөн, бөтә туғандарын саҡырып, баш ите ашатҡандар. Аҙаҡ, Ислам динен ҡабул иткәс тә дауам иткән был йола, хәҙер инде атай-олатайҙар малды, Аллаһтың ризалығы өсөн, тип салып, ризыҡтарын туғандарына, күршеләренә өләшкән, табын ҡорған. Аллаға шөкөр, Быҙаулыҡ ауылына килен булып төшөүемә 30 йыл, йыл һайын көҙөн һуғым ашына, яҙын баш ите мәжлестәренә йөрөшәбеҙ. Уртаҡлашҡандан ризыҡтың бәрәкәте генә арта...

Был юлы ла мәжлес Ҡөрьән аяттарҙы уҡыуҙан башланды. Хәйбулла районы Ағинәйҙәр ойошмаһы етәксеһе Миңзифа Ишемғолова күрше районда килгән ҡунаҡтарҙы сәләмләп, сараға фатиһаһын бирҙе. Быҙаулыҡ ауылы аҡһаҡалы Камил Ғәйзуллин: "Баш итен тәүҙә яҡшы итеп өтәләр, шунан ышҡып, еренә еткереп йыуалар. Ул оҙаҡ бешә, шуға күрә, ҡатын-ҡыҙҙар уны иртәнсәк иртә менән бешерергә һала. Баш итенең иң тәмле ере - теле", - тип һөйләнә-һөйләнә, рәтен белеп кенә баш итен өләштәргә тураны.

Янманһаҙ ауылының ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Хәмдиә Рыҫкилдина хәйбуллаларға рәхмәт әйтеп, шулай тип өҫтәне: "Хәйбуллалар менән беренсе тапҡыр ғына осрашмайбыҙ. Беҙҙең райондың башҡа ауыл ағинәйҙәре лә Хәйбулланың башҡа ауылдары менән аралашып, тәжрибә уртаҡлашып, бер-беребеҙгә йөрөшөп торабыҙ. Хәҙер бына ағинәйҙәргә аҡһаҡалдар ҙа ҡушыла, эштәребеҙ тағы ла йәнләнеп китер, тип өмөт итәбеҙ..."

Һүҙҙе Янманһаҙ ауылы аҡһаҡалы Мөхәррәм Йомағужин дауам итте: "Беҙ, совет осоро балалары, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен бындай кимәлдә күреп үҫмәнек. Ғөмүмән, ул өлкәгә иғтибар бирелмәне. Әле бына башҡорт халҡының әҙәп-әхлаҡ, тәрбиә алымдарын ҡулланып, балаларҙы тәрбиәләргә, ошондай саралар ойошторорға мөмкинлек бар, хатта етәкселек тарафынан да был хуплана. Шуға ла Янманһаҙ ауылында ағинәйҙәр клубы эш башлағас, беҙ, аҡһаҡалдар ҙа, бик теләп уларға ҡушылдыҡ..."

Боҫрап торған баш итен һәр ҡунаҡтың алдына ҡуйып, һыйҙан һығылып торған табын артында ҡунаҡтарын ихлас һыйланы Быҙаулыҡ ағинәйҙәре. Һалма ашалғас, боронғо башҡорт ғәҙәтенсә, ҡоротло һурпа килтерҙеләр. Һыйланып ҡына ултырманы ҡунаҡтар, үҙҙәре белгән әйтем, һынамыштар, мәҡәлдәр менән уртаҡлаштылар.

**Айгизә АСҠАРОВА.**

# КӘРӘК САҠТА УЛАР ТАЯУ



**Һис бер туҡтауһыҙ үҙгәреп торған, тынғыһыҙ, ышаныслыҙ тормошта һәр кемгә таянырға таянысы, арҡаланырға ҡаяһы, йүнәлеште билдәләргә маяғы кәрәк. Йылдан-йыл көсәйә барған ағинәйҙәр хәрәкәте күп ҡатын-ҡыҙҙарға шул таяныс, ҡая, маяҡтарҙың береһенә әйләнде. Учалы районында ойошторолған Ағинәйҙәр ҡоро ла (етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева) йәшәү рәүешенә айырым мәғәнә өҫтәп, ауылдарҙың йөҙөк ҡашы булып балҡый. Әүҙемлектәре, ойошҡанлыҡтары менән айырылып торған, милли йөҙҙө һаҡлауға бар көсөн һалған ағинәйҙәребеҙ үткәргән оло сараларҙың береһе - мөнәжәтселәрҙең беренсе асыҡ район бәйгеһе Уральск ҡасабаһында уҙҙы.**

Беренсе "ҡоймаҡ" һис тә төйөрлө булманы - Сәрүәрә Ғарипова етәкләгән Уральск ҡасабаһы ағинәйҙәре уны юғары кимәлдә ойошторҙо. Сораман менән Ҡоҙаштан килгән балаларҙы иҫәпләмәгәндә, конкурсанттар араһында күпселекте ололар тәшкил итте. Оҙон ғүмер юлында тиҫтәләрсә тапҡыр сәхнәгә сығыу тәжрибәһе булған ханымдар тәүгегә халыҡ алдында һынау тотҡандай, балаларҙай тулҡынланды, мөнәжәттәренең һүҙҙәрен онотоуҙан ҡурҡып, шөбһәләнде, ҡат-ҡат өҫбаштарын рәтләп хитланды. Мөнәжәт көйләгәндәрендә йөҙҙәренән нур бөркөлдө - тылсым түгелме ни шул күренеш! Бәйгеселәрҙең күңелдәре шау нурға тулған булғандыр инде шул мәлдә...

Барыһын да ғәжәп бер тулҡынға көйләгән ағинәйҙәребеҙҙең һәр береһенә еңеүсе исемен бирергә лә мөмкин ине, ләкин конкурс булғас, баһалама ағзалары тарафынан иңиңдәр һайланды. Призлы урындар түбәндәгесә билдәләнде: беренсе дәрәжә дипломы менән Уральск ҡасабаһының "Йәйғор" клубы бүләкләнде; икенсе урынды лайыҡлы рәүештә Көсөк менән Ҡоҙаш ауылы ағинәйҙәре алды; Миндәк, Килмәк, Иҫтамғол, Мәҫкәү һәм Әүеш ауылдары мөнәжәтселәре өсөнсө урынды яуланы. Яңғыҙ башҡарыусылар араһында еңеүселәр - Әминә Хәкимова, Зөбәйҙә Ҡәләмова, Нәсимә Хәкимова, Хәлимә Ғатауллина, Таңһылыу Ғүмәрова, Гөлшат Нуриева. Нурлы бәйгелә ҡәнәғәтһеҙлеккә урын ҡалманы, сөнки ҡатнашыусыларҙың һәр береһенә иғтибар бүленде - диплом, маҡтау һәм рәхмәт ҡағыҙҙары тапшырылды. Мөнәжәтселәр бәйгеһендә еңеүселәр иһә июлдә Сибай ҡалаһында үтәсәк Асыҡ республика мөнәжәтселәр конкурсында ла һынау тотасаҡ.

Мөнәжәтселәрҙең бәйгеһен сәбәп итеп, бер ҡорға йыйылған ағинәйҙәр милли кейем хаҡында ла етди кәңәш ҡорҙо. Үҙебеҙҙең ерлеккә, ырыуҙарыбыҙға хас камзул, күлдәк, ҡашмау, түшелдерек, селтәр, яғаларҙы тергеҙеүҙе бурыс итеп алып, ошо юҫыҡта даими эш алып барырға килештеләр. Һүҙ юҡҡа ғына милли кейем тураһында барманы - 19-сы майҙа БДУ-ның Учалы вәкиллегендә "Милли кейем: үткәндәрҙән - киләсәккә" тип аталған Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы үтәсәк. Ағинәйҙәрҙең унда әүҙем ҡатнашасағына бер шик тә юҡ - улар ҡайҙа ла алда.

**Әлиә ҠАРАБАЕВА.**
**Учалы районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Бишенсе сер: мин дә, һин дә ғәйепле түгел

**Ғәйеп тойғоһо үҙеңде язалауға килтерә.** Яза төрлө формала сағылыш таба: депрессия, кәмселек тойғоһо, үҙеңә ышаныс кәмеү, түбән үҙбаһа, төрлө сирҙәр тупланмаһы, яратырға һәләтһеҙлек һ.б. Кем ғәфү итә белмәй һәм йөрәгендә асыу йөрөтә, улар үҙҙәрен дә ғәфү итә белмәй. Ундай кешеләр ғәйеп тойғоһон йөкмәп алған. Хаталарҙы күрмәҫкә тырышыу ҙа ғәйеп тойғоһон кисереү кеүек үк зыянлы. Уларға күҙгә төшкән сүп кеүек итеп ҡарарға кәрәк. Проблеманы асыҡлап, үҙегеҙҙе ғәйепләмәгеҙ һәм ғәйеп тойғоһо кисермәгеҙ. Бары тик ошо проблеманан арынығыҙ.

**Үткәндәр һабағы.** Үҙ-үҙеңә тулы ышаныс формалаштырыу өсөн үткәндәрҙән һабаҡ алыу ҙур әһәмиәткә эйә. Әйткәндәй, үткәндәге ғәмәлдәр өсөн ғәйеп тойғоһоноң һабаҡтарға бер ниндәй ҙә ҡатнашлығы юҡ. Һабаҡ алыу - тимәк, хаталарҙы танып, мөмкинлектәрегеҙ һәм Аң кимәлегеҙҙән сығып, уларҙы киләсәктә булдырмаҫҡа тырышыу. Башҡарылған ғәмәлдәр өсөн уйығыҙҙа үҙегеҙҙе ҡамсылау йәки ғәйеп тойғоһо өсөн ҡиммәтле ваҡытығыҙҙы һәм энергияғыҙҙы әрәм итеү файҙалы һабаҡтың бер өлөшө түгел. Был кире хис-тойғолар һеҙгә тормошоғоҙҙо үҙгәртергә ҡамасаулай ғына. Бер кем дә үткәндәрҙә йәшәй һәм бер үк ваҡытта хәҙерге тормошта уңышлы эшләй алмаған кеүек, аң да бер үк ваҡытта ике ысынбарлыҡ менән идара итә алмай. Һеҙҙең тормошоғоҙ - уйҙарығыҙ сағылышы. Әгәр иғтибарығыҙ эшләргә, әйтергә, башҡарырға тейешле нәмәгә йүнәлтелмәгән икән, хәҙергегеҙ күңел ҡайтыуы, хәүеф һәм күңел тынысһыҙлығы менән тулы буласаҡ. Был бик юғары хаҡ. Иң яҡшыһы - үҙегеҙҙе ғәфү итегеҙ һәм алға барығыҙ.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ - һеҙ һәр саҡ мөмкин булғандың барыһын да эшләйһегеҙ.** Ниндәй генә ҡарар ҡабул итһәгеҙ ҙә, Аңығыҙҙың хәҙерге аныҡ ваҡытына нигеҙләнгән. Әлеге ваҡыттағы торошоғоҙҙан яҡшыраҡ була алмайһығыҙ, сөнки теләһә ниндәй хәл-торошто ҡабул иткән асыҡлыҡ һәм аныҡлыҡ бар. Әгәр Аң боҙолған икән, боҙолған тәжрибә аласаҡһығыҙ. Ул һеҙҙе һуңынан үҙегеҙ үкенәсәк һүҙҙәр һөйләргә һәм ғәмәлдәр ҡылырға мәжбүр итәсәк. Аң ниндәйҙер билдәле бер кимәлдә билдәләнгәнлектән, нимә һөйләйһегеҙ йәки һөйләмәйһегеҙ, эшләйһегеҙ йәки эшләмәйһегеҙ - ул һеҙҙең һәләттәрегеҙҙең иң юғары сағылышы. Хатта был юғарылыҡ аҡылһыҙ һәм ялған булған осраҡта ла. Сөнки һеҙҙең бары тик бер генә һайлау мөмкинлегегеҙ бар һәм ул Аңығыҙҙың тап ошо аныҡ мәлдәге кимәле менән баһалана.

**Һеҙ - ғәмәлдәрегеҙ түгел.** Ғәмәлдәр - төп ихтыяждарығыҙҙы ҡәнәғәтләндереү өсөн файҙаланылған саралар ғына. Улар аҡыллы йәки аҡылһыҙ булыуы мөмкин, әммә ул һеҙҙе яҡшы йәки насар кеше итмәй. Асылығыҙ буйынса һеҙ рухи камил шәхес, әммә әлеге ваҡытта боҙолған Аң етәкселегендә ниндәйҙер ғәмәл башҡараһығыҙ. Изге китапта Һеҙҙең Аллаһы Тәғәлә образына һәм уға оҡшатып яралтылыуығыҙ аныҡ һәм асыҡ яҙылған. Әгәр шулай икән, тимәк, һеҙ камил, әммә Аңығыҙ быны аңлауға ҡамасаулай. Был хәҡиҡәтте ни тиклем тәрәнерәк аңлаһығыҙ, шул тиклем камиллығығыҙҙы сағылдырыу мөмкинлеге күберәк буласаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*АФАРИН!*

# ҠАЙҺЫ АУЫЛ...

## ошондай ансамбле менән маҡтана ала?

**Тамашаларҙың һәммә төрләһөн күреп-баһалап өйрәнгән баш ҡала тамашасыһы күңелен яулауы еңелдән түгел. Хәйер, сараларҙың күплегенән күҙҙәр сыбарлана, әммә күңел ҡылдарын тибрәтерлек, кәйеф күтәрерлек ихлас маһирлыҡ менән ойошторолғандары һирәк. Ошо көндәрҙә Өфөнөң төп сәхнәләренең береһе булған "Башҡортостан" концерт залында тап шундай уникаль күренештең - заман ҡалыптарынан һәм талаптарынан күпкә өҫтөн торған күркәм тамашаның шаһиты булдыҡ.**



Әле генә нәшриәттең эҫе табаһынан төшкән "Ләйсән" - беҙҙең байрам" тигән йыйынтыҡтың исем туйы булараҡ ойошторолған концерт (режиссеры - Илшат Фәхертдинов) яҡташтарҙың осрашып-аралашыу урынына ғына түгел, милләт нигеҙен ныҒытып тороусы халыҡ сәнғәтенең дан сәғәтенә, тормош юлын уға бағышлаҒандарҙың тантана минуттарына әүерелде. Ярты быуатлыҡ тарихы булған "Ләйсән" халыҡ бейеүҙәре ансамблен сәнғәт һөйөүселәр яҡшы белә - сағыу сығыштары менән төрлө кимәлдәге тамашаларға йәм һәм йән өргән коллективтарҙың береһе ул. Республикалағы башҡа бихисап ансамблдәрҙән айырып торған рәсми билдәһе лә бар - "Рәсәйҙең атҡаҙанған халыҡ ижады коллективы" исемен йөрөткәндәр Башҡортостанда ни бары дүртәү генә. Кинерәк баһалағанда, республика, ил, халыҡ-ара кимәлдәрендә, ауыл һабантуйынан башлап, Дәүләт Кремль һарайында, Испания, Италия һәм башҡа Европа илдәрендә, Америка һәм башҡа алыҫ тарафтарҙа меңәрләгән тамашасыларҙың һөйөүен һәм алҡыштарын яулаған данлыҡлы бейеүселәр коллективы ысын мәғәнәһендә Башҡортостан халыҡ сәнғәтенең йөҙөн билдәләүсе күренешкә әүерелгән, шул уҡ ваҡытта милли үҙенсәлектең күп яҡлы сағылыштарын һаҡлаусы ла, бейеү сәнғәте традицияларын быуындан-быуынға тапшыра килеүсе мәҙәниәтебеҙҙең һаҡсыһы ла ул.

Йыйынтыҡты төҙөүсе, баҫмаға әҙерләүсе билдәле журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Луиза Фархшатова өсөн был байрам икеләтә тулҡынландырғыс булғандыр. Беренсенән, күңел нурҙарын түгеп, бәпләп туплаған ижад емешенең донъя күреүе үҙе бер ҡыуаныс булһа, "Ләйсән" ансамбленә нигеҙ тап уның тыуған яғында, "Байрамғол"да һалыныуы, бейеүсе ағай-апайҙарҙың күреп-белеп үҫкән яҡташтары, ауылдаштары булыуы - икеләтә яуаплылыҡ та, дәрт-дарман өҫтәүсе гәмәл дә. Китапта "Ләйсән"-дең эшмәкәрлеге хаҡында тулы мәғлүмәт тупланған. Исемлектә - 83 атама: милләтебеҙҙең үҙенсәлеген билдәләгән "Ҡороҡсолар", "Беҙҙең байрам", "Байрамғол ҡайындары", "Ҡыр ҡаҙҙары", "Зарифа", "Гөлнәзирә", "Башҡорт лирик бейеүе", "Өс туған", "Заһиҙә", "Азамат", "Башҡорт егеттәре" һәм башҡалар; рус, татар, ҡалмыҡ, уйғыр, молдаван, украин, кавказ халыҡтары бейеүҙәре. Ҡайһы төбәктең ҡәҙимгә ауыл кешеләре ошондай унышҡа өлгәшкән дә, ошондай ҡаҙаныштары менән маҡтана ала? Унан һуң тағы бер үҙенсәлекте әйтеп үтмәү мөмкин түгел: сәхнәләрҙә яулаусылар эштә лә һынатмаған һәм һынатмай. Улар араһында алдынғы күрһәткестәре өсөн төрлө кимәлдәге маҡтау ҡағыҙҙарына лайыҡ булыусылар, хатта Дан ордены кавалерҙары ла бар. Улар хаҡында айырым әйтеп китеү фарыз. Мәүлиҙә һәм Салауат Нурмөхәмәтовтар, Мәрйәм һәм Алик Уразбахтиндар, Нина Бухтиярова, Финзира Ғарипова, Фәсих Кәримов, Тәүхит Мөхәмәҙиев, Дим Сәғитуллин, Любовь Косогорцева, Марат һәм Рафаэль Ғабдуллиндар, Вәис Ҡаһарманов, Вәис Солтанов, Урал Әхмәҙиев, Малбай Фазлетдинов, Фәнүз Азаматов, Зөлфиә Кирәева, Ринат Жамалов һәм башҡалар... Уларҙың исемдәре ансамблдең фондына алтын хәрефтәр менән уйып яҙылған. Ә ошо йылдар эсендә нисәмә бейеүселәр династияһы үҫеп еткән! Ҡасандыр олаталары-өләсәләре шаулатҡан сәхнәләрҙә бөгөн уландары-ҡыҙҙары, ейән-ейәнсәрҙәре гөрләтә, бейеү йәмәнә табынып, "Ләйсән" гәме менән йәшәй. Ғариповтар, Кәримовтар, Алсынбаевтар... Учалы бөркөтө, сәмле, сағыу бейеүҙәре менән айырылып тороусы Миҙәхәт Алсынбаев - ансамблдең бөгөнгө етәксеһе булһа, бейеүселәр араһынан республика кимәленә танылған хореографтар, режиссерҙар ҙа үҫеп сыҡҡан. Рәйес Низаметдинов (Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты), Фәнис Кәримов, Айбулат Әһлиев - шундайҙарҙан. Был данлы исемлекте дауам итергә булыр ине, мәгәр мәҡәләнең мөмкинлеге сикле, кемдәр телгә алынмаған, беҙҙә гәфү итһендәр, йә иһә "Ләйсән"- беҙҙең байрам" китабында тулы мәғлүмәт менән танышырға була.

Шулай итеп, 2020 йылда Башҡортостанда кимәле һәм әһәмиәте йәһәтенән быҒаса Рәсәйҙә бер тапҡыр ҙа үткәрелмәгән оло байрам - Бөтә донъя Фольклориадаһы үткәреләсәк. Донъялағы сәйәси-иҡтимағи хәл ҡатмарлы, ҡиммәттәр алмашынған буталсыҡ заманда ошондай сараның республика ерлегендә ойоштороло-уы оло яуаплылыҡ та, баһалап бөткөһөҙ ҙур мәртәбә лә. Халыҡ сәнғәте, бейеү, йыр-моң тантаһында "Ләйсән"дәр ҡатнашып ҡына ҡалмаясаҡ, ә илебеҙ данын лайыҡлы яҡлаясаҡ, сағыу сығыштары менән алыҫ тарафтарҙы яҡын итеп килгән ҡунаҡтарҙы хайран ҡалдырасаҡ әле...

**Гүзәлиә БАЛТАБАЕВА.**

*ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!*

# БӘЛӘЛӘР

## тәбиғәттә лә...



**Талпан энцефалит һәм Лайма ауырыуын таратыусы булып тора. Талпандарҙың әүҙемләшкән мәле - май, июнь айҙары. Быйыл яҙ иртә килеү сәбәпле, талпандар иртәрәк һөжүм башланы. Һауа температураһы 10 градустан күтәрелгәс тә хәүеф арта.**

Көндәр ҡоро һәм йылы торғанда талпан әүҙемлеген бер аҙ кәметә, ә бына еүеш һәм болотло көндәрҙә үҙен яҡшы тоя. Юл буйындағы үләндә, ҡыуаҡлыҡтарҙа, ағастарҙа талпан күп була. Ҡағиҙә булараҡ, был бөжәк кейемгә йәбешә һәм унайлы мәл тыуғас та кешенең тиреһенә ҡаҙала. Талпан бигерәк тә тире йоҡаҡ булған урындарға - муйын, ҡолаҡ арты, сандыр, эскә ҡаҙалыусан.

Талпандан нисек һаҡланырға? Яҙ һәм йәй тәбиғәткә сыҡҡанда асыҡ ер ҡалдырмай кейенергә кәрәк. Асыҡ төҫтәге кейем һайлағыҙ, сөнки ҡара кейемдә талпанды күреүе ҡыйын. Футболканы салбарға һалып кейегеҙ. Тыштан ингәс, кейемде сығарып ҡағығыҙ. Тәнде ҡарап сығыу ҙа мотлаҡ. Талпан сәскә лә һырый, шуға ла сәсте ваҡ тешле тараҡ менән тарау кәрәк.

Талпан тешләһә, нимә эшләргә? Был һорау буйынса кәңәштәр күп. Профессиональ ярҙам ала алмайһығыҙ икән, талпанды стериль бирсәткәләрҙә тартып алырға кәрәк. Шарт - бөжәктең башы тәнегеҙҙә ҡалмаһын. Талпанға ныҡ баҫмағыҙ, югиһә, ул тағы ла төпкәрәк инәсәк. Пинцет йәки таҙа марля алып, тешләгән еренән яҡынырак тотоп, тере килеш тартып сығарырға тырышығыҙ. Бынан һуң ҡулдарҙы йыуығыҙ, тирене йод йәки спирт менән эшкәртегеҙ, ә талпанды быяла һауытҡа һалып, лабораторияға тапшырығыҙ. Әгәр ҙә кешегә талпан ҡаҙалһа, уның сәләмәтлеген бер нисә көн күҙәтергә кәрәк. Температура күтәрелһә, баш ауыртһа, баш әйләнһә, йөрәк болғанһа, табипҡа мөрәжәғәт итеү мотлаҡ.

## ...тормошта ла етерлек



**Республикала йыл башынан алып 974 вич-инфекциялы кеше асыҡланған, шуларҙың 643-ө (66 процент) - ир-ат, 331-е (33,98 процент) - ҡатын-ҡыҙ, 20 кеше республикала йәшәүсе түгел. Беренсе тапҡыр асыҡланыусыларҙың 153-ө - Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса яза үтәү федераль хеҙмәте идаралығына ҡараған учреждениеларҙан.**

Йөклө ҡатын-ҡыҙҙар араһында вич-инфекциялы 154 кеше теркәлһә, шуларҙың 117-һе бала тапҡан. Был сирҙән 203 кеше вафат булған. Ә инде был һандарҙы дөйөмләштереп, уртаса йыллыҡ күрһәткестәр буйынса анализлағанда, быға тиклем республикала йылына 7-8 мең вич-инфекциялы кеше теркәлһә, һуңғы йылдарҙа был һан 22 меңгә еткән. Көн һайын 7-10 ауырыу кеше асыҡлана. Шул уҡ ваҡытта Үҙәктә табиптың сирле менән күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшер мөмкинлеге юҡ - урын етмәгәнлектән, бер бүлмәлә икешәр табип бер юлы ҡабул итә. Һөҙөмтәлә, күптәр үҙҙәренең анонимлығы асылыуға шикләнеп, Үҙәккә йөрөүҙән баш тарта. Әммә әлегә талаптарҙы ҡәнәғәтләндерерлек бина табыуы бик ауыр булыуын белдерә Үҙәктең етәкселәре.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Май (Рәжәб - Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (25) дүшәмбе | 4:06 | 5:36 | 13:30 | 19:21 | 20:51 | 22:21 |
| 3 (26) шишәмбе | 4:04 | 5:34 | 13:30 | 19:22 | 20:52 | 22:22 |
| 4 (27) шаршамбы | 4:02 | 5:32 | 13:30 | 19:24 | 20:54 | 22:24 |
| 5 (28) кесе йома | 4:00 | 5:30 | 13:30 | 19:26 | 20:56 | 22:26 |
| 6 (29) йома | 3:58 | 5:28 | 13:30 | 19:28 | 20:58 | 22:28 |
| 7 (30) шәмбе | 3:56 | 5:26 | 13:30 | 19:30 | 21:00 | 22:30 |
| 8 (1) йәкшәмбе | 3:54 | 5:24 | 13:30 | 19:32 | 21:02 | 22:32 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 апрель "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

**5-6 май "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтгәлиева), лирик комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. Башлана 11.00, 15.00

**6 май "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия. Башлана 11.00, 15.00

*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**Һуңғы йылдарҙа интернет селтәрендә "Йәш кеше уҡырға тейеш китаптар", "Иң шәп урыҫ китаптары", "Донъялағы иң шәп китаптар" кеүек төрлө исемлектәр төҙөү популярлашып китте. Был исемлектәргә сит ил һәм рус яҙыусыларының фәһемле китаптары индерелә, бөйөк фәйләсуфтарҙың хеҙмәттәре, заманалар үҙгәрһә лә актуаллеген юғалтмаған "мәңгелек" әҫәрҙәр менән танышырға тәҡдим ителә.**

Әлбиттә, донъянан артта ятып ҡалырға теләмәгән һәр кем ошо китаптарҙы мотлаҡ уҡый. Әммә берегеҙ булһа ла үҙенә: "Башҡа халыҡтарҙың аҡыл эйәләре яҙғандарҙы беләм, ә үҙ милләтемдең бөйөк шәхестәренең ижады менән танышмынмы?" - тигән һорауҙы биргәне бармы? Әгәр ҙә Башҡортостандан ситкә сығып китергә, төрлө милләт кешеләре менән аралашырға тура килһә, уларға үҙебеҙҙең тыуған төйәгебеҙ, тарихыбыҙ, халҡыбыҙ тураһында "Рәсәй Федерацияһы территорияһында йәшәгән халыҡ" тиеүҙән артыҡ нимә һөйләй алабыҙ? Ҡаршыларында иҫ киткес бай ауыҙ-тел ижады булған, донъяға билдәле мәғрифәтсе-шағирҙар, яҙыусылар бүләк иткән милләт вәкиле баҫып тороуын нисек белдерергә?

Эйе, башҡорт халҡының тарихы, бөйөк шәхестәре, мәҙәниәте, йолалары тураһында һорауҙарға лайыҡлы яуап биреү өсөн булһа ла үҙебеҙҙең китаптарҙы уҡырға кәрәк. Тормош асылын аңлау, кеше мөнәсәбәттәренә төшөнөү, татыу ғаилә ҡороу, бәхетле булыу серҙәрен дә үҙебеҙҙең башҡорт авторҙарының китаптарынан эҙләү мөһим. Сөнки башҡорт ғаиләһендәге мөнәсәбәттәр, башҡорт кешеһенең күңеленә яҡын әйберҙәр тураһында үҙебеҙҙең милләттең аҡыл эйәһенән дә яҡшыраҡ, урынлыраҡ, тапҡырыраҡ итеп әйтеүсе булмаясаҡ.

Милләттәштәргә бихисап башҡорт китаптары араһынан фәһемле, белем даирәһен үҫтергән, бер ваҡытта ла актуаллеген юғалтмаған, зауыҡлы булғанын табырға ярҙам итеү өсөн "Киске Өфө" гәзите "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы үткәрергә булды. Был акция сиктәрендә һәр кем үҙе теләгән башҡортса китапты/әҫәрҙе уҡып, шуның тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт яҙып, редакция адресына хат ебәрергә йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөнә һалырға тейеш. Хатығыҙҙа китаптан/әҫәрҙән алынған фәһем, аҡыл, мөһим мәғлүмәт тураһында, уның тәрбиәүи әһәмиәте хаҡында тасуири итеп яҙырға ла кәрәк булыр. Сөнки тап ошо китап/әҫәр ни өсөн **"Башҡорт китабы топ-100+"** исемлегенә инергә лайыҡ йәки инмәҫкә тейеш икәнен иҫбатлау мөһим.

Белгәнендә һөйләп бирә белеү - үҙе бер оҫталыҡ, тиҙәр, шуға башҡорт теленең тел байлығын ҡуллана алыуығыҙҙы ла ошо хаттар аша һынарға иҫәп тотабыҙ. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен үҫтереү, был өлкәләге хәл ителәһе мәсьәләләргә иғтибар йәлеп итеү, йәштәрҙе туған телдә һөйләшергә һәм яҙырға өйрәтеү кеүек маҡсаттарҙы ла иҫтән сығармайбыҙ. Әлбиттә, милләттәштәрҙе китап уҡыуға ылыҡтырыу, әҙәбиәт арҡылы тәрбиәләү һәм зауығын үҫтереү, белем даирәһен арттырыу, илһөйәрлек тойғоларын уятыу ҙа изге ниәттәребеҙҙең береһе. Аҡыллы, мәғлүмәтле, илһөйәр, юғары уңыштарға өлгәшкән, заман башҡорто мотлаҡ уҡырға тейеш **"Башҡорт китабы топ-100+"** исемлеген бергәләп төҙөйөк, милләттәштәр! Халҡыбыҙҙың киләсәге тураһында уйланғандар битараф ҡалмаҫ һәм олоһо ла, кесеһе лә уҡырлыҡ китаптарҙы/әҫәрҙәрҙе билдәләргә ярҙам итер, тип көтәбеҙ.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы 2016 йылдың 1 майынан алып йыл аҙағынаса дауам итәсәк. Теләгән һәр кем ошо арауыҡ эсендә уҡылған башҡортса китаптар тураһында "Киске Өфө" гәзите редакцияһына хаттар яҙа, "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" (vk.com/kiskeufa) төркөмөнә **"#башкитап"** хештегы ҡуйып, үҙе тәҡдим иткән китап тураһында мәғлүмәт урынлаштыра ала.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТУҒАНЛЫҠТАН БИҘМӘ...

## нәҫеләң ҡорор

Нык һөйә, тип һөйөнмә, уртаса һөйә, тип көйөнмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ваҡытты үлтерергә теләгәндәрҙе йыш ҡына ваҡыт үҙе үлтерә.

**(Пьер Буаст).**

Ваҡыт барыһын да үҙе менән алып китә; йылдар теҙеме исемде лә, тышҡы йөҙҙө лә, холоҡто ла, яҙмышты ла үҙгәртеү көсөнә эйә.

**(Платон).**

Кешеләр йәшәү өсөн эшләүгә ғүмеренең күп өлөшөн сарыф итә, ә ял өсөн ҡалған аҙ ғына ваҡыты уны шул тиклем нык борсой һәм улар унан төрлө ысулдар менән арынырға тырыша.

**(Иоганн Гете).**

Беҙҙең тормош ике дәүергә бүленгән: беренсеһен беҙ киләсәктә, икенсеһен үткән заманда үткәрәбеҙ.

**(Николай Карамзин).**

Байлыҡ туплап та унан файҙаланмаған һәм фәндәрҙе өйрәнеп тә уны ҡулланмаған был ике кеше емешһеҙ хеҙмәт итте һәм файҙаһыҙға тырышты.

**(Саади).**

Уңыш көн һайын бер эште яҡшы итеп башҡарыуҙан килә.

**(Ф. Крейн)**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:**

**"- Һин бик үпкәселһең, - ти Уҡытыусы уҡыусыһына.- Һин нимәнән ҡурҡаһың?**

**- Бер нiҙән дә ҡурҡмайым, - ти уҡыусы. - Тик мин иптәштәремдең ахмаҡ шаяртыуҙарын яратмайым.**

**- Үпкәләүҙәр артында ҡурҡыу йәшеренгән була. Ә һин ниҙән ҡурҡаһың?**

**- Мин һәр ваҡыт көлкө объекты булыуҙан, мине кәмһетеүҙәренән ҡурҡам. Шуға ла иптәштәремдең шаяртыуы минең йөрәгемде яралай... - тип яуаплай уҡыусы.**

**- Көлкөнөң ниндәй насарлығы бар?! - ти Уҡытыусы. - Ә һин бер ваҡытта ла кәмһенеү тураһында уйлама! Шул саҡта, моғайын, һин дуҫтарың менән бергә үҙ-үҙеңдән көлә алырһың. Ҡурҡыуыңа ҡаршы бар! Аңлы рәүештә башыңды ахмаҡлыҡҡа һал, башҡаларҙы көлдөрөрлөк итеп ҡыланған бул. Шул саҡта иһә ғәжәп хәлдәр булыр - ҡурҡыуың үҙе һинән ҡурҡа башлар. Ә ҡурҡыу үҙе ҡурҡа башлаһа, ул инде ҡурҡыу түгел...**

**Уҡытыусыһының һүҙҙәренә аптырап, башын сайҡап торған үҫмергә ҡарап, һүҙен тағы дауам итә Уҡытыусы:**

**- Бына күрерһең, үҙе ҡурҡыуға ҡалған ҡурҡыу уҫал арыҫландан иркә бесәйгә әйләнер..."**

*ВИКТОРИНА*

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай "Тыштағы зыярат" романында ниндәй социаль проблемаға аңлатма бирә?**

**а)** эскелеккә;
**б)** мәңгелек ҡиммәттәрҙең үҙгәреүенә;
**в)** глобалләшеүгә;
**г)** үҙ-үҙеңә ҡул һалыуға.

**Тамара Ғәниева ошо сит телдәрҙең ҡайһыһын яҡшы белә?**

**а)** сыуаш телен;
**б)** мари телен;
**в)** удмурт телен;
**г)** мордваның эрзя һөйләшен.

**Федор Достоевскийҙың "Братья Карамазовы" романында Зосима ҡарт кинйә малай Алексейҙы үҙенең ҡайһы туғанына оҡшата?**

**а)** ҡустыһына;
**б)** атаһына;
**в)** ағаһына;
**г)** әсәһенә.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ төҙөнө.**

*ҺҮҘЛЕК*

# БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Ҡарға йыуаһы** - лук обманчивый
**Ҡарһаҡ үлән** - очанка татарская
**Ҡарут** - ворсянка
**Ҡасағуты** - грыжник седоватый
**Ҡаты билсән** - осот шероховатый
**Ҡауын** - дыня
**Ҡауын ағасы** - дерево дынное
**Ҡаясай үләне** - василек шероховатый
**Ҡоба тал** - верба красная, ива остролистная
**Ҡойроғүлән** - хвостник
**Ҡолонғойроҡ** - вейник наземный
**Ҡомалаҡ** - хмель
**Ҡомалаҡ һымаҡ люцерна** - люцерна хмелевая
**Ҡондораҡ** - полевица обыкновенная
**Ҡорос үлән** - стальник
**Ҡуҙаҡ борос** - перец стручковый
**Ҡуҙғалаҡ** - щавель
**Ҡурай** - реброплодник уральский
**Ҡурай еләге** - малина
**Ҡурпы, йәшән** - отава
**Ҡуһа** - ситник
**Ҡуян күҙе** - девясил германский
**Ҡуян кәбеҫтәһе** - молодило
**Ҡуян көпшәһе** - живокост полевая
**Ҡуян мышары** - василистник малый
**Ҡуянтабан** - заячья лапка
**Ҡуянтубыҡ** - бутень прескотта
**Ҡыҙыл һолоүлән** - овсяница красная
**Ҡыҙыл йылан ҡуҙағы** - лядвенец рогатый
**Ҡыҙыл көртмәле** - брусника
**Ҡыҙыл алабута** - лебеда красная
**Ҡыҙыл бөрлөгән** - костяника

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 29 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4927
Заказ 751/04